ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4 октябрь - ноябрь (ҡарасай - ҡырпағай) 2016

№44 (722)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Туған тел мөхитендә уҡыу... тәртипле лә итә беҙҙе



6

Һәр ир-егет күңелендә... эйәрле-йүгәнле ат ята



8-9

Йәншишмәнең һыуын эсмәгеҙ!



11

Киҙеүҙе... ауырымаҫҡа әҙерләнеп ҡаршылайыҡ



12

ТВ-программа 14

*Наполеон Вестфалияға король итеп ултыртҡан ҡустыһының сәйәсәтенә ризаһыҙлыҡ белдергән. Ләкин әйләнә-тирәләгеләре быға ҡаршы килгән һәм ҡустыһының артыҡ ныҡ изге йән булыуын билдәләгән. "Монарх тураһында "изге йән" тип әйтәләр икән, тимәк, ул бер нигә лә эшкинмәй", - тип асыулана Наполеон.*

*(Синезий).*

*АФАРИН!*

# ӨФӨБӨҘ АРТАБАН ДА КҮРКӘМЛӘНӘСӘК!



**Өфө ҡала округы Советы сессияһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы итеп яңынан, өсөнсө мөҙҙәткә Ирек Ялалов һайланды. Уның өсөн 34 депутат тауыш бирҙе.**

Мәғлүм булыуынса, хакимиәт башлығы вазифаһына дүрт кандидат дәғүә итте. Улар: ҡала округы Советының үткән саҡырылыш депутаты Николай Герасимов, Башҡортостан адвокаттар коллегияһы адвокаты Ринат Әхмәҙуллин, "Өфө ҡала уты" директоры Илдар Чанышев һәм хакимиәт башлығы вазифаһын башҡарыусы Ирек Ялалов. 19 октябрҙә уҙған конкурс процедураларында өс кандидат ҡаланың социаль-иҡтисади үҫеше буйынса үҙҙәренең программалары менән таныштыра. Ә Ринат Әхмәҙуллин иһә процедураларҙа ҡатнашыу өсөн яҙған ғаризаһын кире ала.

- Конкурсҡа ҡатнашыусы кандидаттар Өфө ҡалаһын үҫтереү буйынса мөһим программалар менән сығыш яһаны, ҡайһы бер тәҡдимдәр артабанғы эшмәкәрлектә файҙаланыласаҡ. Әммә тап Ирек Ишмөхәмәт улының программаһы тулы, ҡала тормошоноң барлыҡ өлкәләрен үҙ эсенә ала һәм, иң мөһиме - тормошҡа ашырырлыҡ, - тине депутаттарҙың ҡарарына аңлатмалар биреп Өфө ҡала округы Советы рәйесе Валерий Трофимов.

- Биш йыл элек Өфө бөтөнләй икенсе ҡала ине, ошо ваҡыт эсендә торлаҡ төҙөлөшө, инфраструктура, инвестициялар йәлеп итеү буйынса ла күп нәмәләр эшләнде, - тине үҙенең сығышында Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов. - Төрлө конкурстар һөҙөмтәләре буйынса ла баш ҡала лидерҙар иҫәбендә. Һәм бындай миҫалдар етерлек. Тимәк, уҙған биш йылда бушҡа йәшәмәгәнбеҙ, насар эшләмәгәнбеҙ. Өфө артабан да үҫәсәк, яҡшырасаҡ, ә яҡшы урынға һәр саҡ кеше йыйыла һәм күптәр йәшәү өсөн баш ҡаланы һайлаясаҡ. Ләкин урбанизация системалы рәүештә алып барылырға, ул асыҡ, аңлайышлы булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта тормош сифатын күтәреү тураһында ла уйларға кәрәк.

**(Дауамы 4-се биттә).**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Туған телдәге матбуғат баҫмаларын уҡыйһығыҙмы, алдыраһығыҙмы, алдырмаһағыҙ, сәбәбе низә?

***Айгөл АЙЫТҠОЛОВА, Күгәрсен районы гәзите хәбәрсеһе:*** Бала саҡтан, йәш саҡтан ҡанға һеңдерелгән иң яҡшы ғәҙәт ул туған телдәге гәзит-журналдарҙы уҡыу. Мин, әлбиттә, уларһыҙ йәшәй алмайым. Уларһыҙ донъям китек булыр ине. Мин алдырған гәзит-журналдар хаҡы ярты йылға бер тапҡыр 6 мең тирәһенә барып баҫа шикелле. Үҙем дә район гәзите хәбәрсеһе булғас, халыҡтың ни өсөн матбуғат баҫмаларына яҙылмауы сәбәбе тураһында һорашып-белешеп йөрөйөм. Төп сәбәп - хаҡтарҙың ҡиммәт булыуында, аҡса юҡлыҡта, тиҙәр. Пенсионерҙарға ҡалды инде гәзит алдырыу, матбуғаттың төп таянысы - улар. Элек уҡытыусылар иң әүҙем уҡыусылар булһа, хәҙер гәзит алдырмаған уҡытыусылар ҙа етерлек. Биш-алты меңгә эшләп йөрөгән ябай ауыл ғаиләләренән әллә ни көтөп булмай. Уларҙың бер айлыҡ эш хаҡын гәзиткә яҙҙырыу өсөн сығарып һала алмағанлығы көн кеүек асыҡ. Бюджет өлкәһендә эшләгәндәрҙән матбуғатҡа яҙылыуҙы талап итәләр ҙә ул, ләкин башҡаларға был талап ҡағылмай. Ҡалғандар өсөн был бурыс аң, намыҫ эше. Ләкин... Ундайҙар әллә ни күп түгел шул. Хатта уңышлы эшҡыуарлыҡ алып барғандар араһынан да гәзит алдырмаусылар бихисап. Әле кисә генә гәзит алдырмаған бер танышымдан быны сәбәбен һораным. "Эш гәзиттең хаҡында түгел, алдырғым килмәй", тип яуапланы ул. Һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ...

Матбуғатты интернет алыштыра, тип тә һылтаналар хәҙер. Быныһы ла зауыҡ эше. Мин быйыл бер нисә баҫманың электрон вариантына яҙылып ҡараным шулай ҙа. Шул иҫәптән район гәзитенә лә. Баҫмалар алдан килә, һүҙ юҡ, әммә гәзитте ҡулыңа алып, тотоп уҡыу тойғолары бөтөнләй икенсе.

***Ғәлиә ФӘЙЗУЛЛИНА, уҡытыусыһы, Ишембай ҡалаһы:*** Шәхсән мин үҙем башҡорт телендә сыҡҡан бер генә баҫмаға ла яҙылмай ҡалғаным юҡ. Заманында икешәр дана ла алдырҙым: береһен - өйөмдә үҙем уҡыр өсөн, икенсеһен - мәктәптәге кабинетым өсөн. Интернат уҡыусылары өсөн гәзит-журналдарҙың төпләнмәләрен дә алып барам. Бер юлы ауырға төшмәһен, тип, матбуғат баҫмаларына яҙылырға тейешле аҡсамды самалап, төйнәп ҡуйырға күнеккәнмен.

Әлбиттә, туған телдәге гәзит-журналдарҙы пенсионерҙар уҡый әле, тип, тынысланып ҡуйырға ярамай. Ул баҫмаларҙы иң тәүҙә балалы йәш ғаиләләр уҡырға тейеш. Бына "Киске Өфө"лә бала тәрбиәләү буйынса күпме матур кәңәш, фәһемле фекерҙәр баҫыла. Йәш атай-әсәйҙәр, әлбиттә, уҡырға ваҡыт юҡлыҡҡа ла, аҡса ҡыҫынҡы булыуға ла зарланырға мөмкиндәр. Ләкин балаларының киләсәген ҡайғыртҡандар барыбер форсатын табасаҡ. Ундай атай-әсәйҙәр менән һөйләшеүе лә, эшләүе лә бер кинәнес. Уларҙың гәзит уҡығаны бер һөйләшеүҙән аңлашылып тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, матбуғат баҫмаларын уҡымаған, илһөйәрлек, телһөйәрлек төшөнсәһен бөтөнләй аңламаған һәм балаларына ла аңлатмаған ғаиләләр ҙә бар, улар өсөн шул мәктәп, уҡытыусылар тырыша инде...

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

✓ *Йәштәр интернетта әҙәби әҫәр, рухи ҡиммәттәр тураһында уҡып ултырмай һәр хәлдә. Был сығанаҡ аша ул йышыраҡ сәйәси ығы-зығы, кем кемде үлтергән, отҡан, тигән мәғлүмәт, башҡа сүп-сар менән тултыра башын.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҺЫУ ҺӘМ ЭЛЕКТР ӨСӨН...
## күберәк түләйһең түгелме?

***Илдус ҠОЛҺАРИН, "Дим" Торлаҡ хужалары ширҡәте директоры:*** Хоҡуҡи нигилизм бик көслө беҙҙең халыҡта. Торлаҡ хужалығына ҡағылышлы бик күп мәсьәләләр кешеләрҙең үҙ хоҡуғын белмәүенән, быға ҡағылышлы закондарҙы, ҡарарҙарҙы уҡып ҡарамауынан килеп сыға. Электр энергияһы, һыу, газ өсөн квитанциялар килһә, шунда яҙылған сумманы кеҫәһенән сығарып һала ла, һуңынан ғына, был тиклем аҡсаны нимә өсөн түләнем әле, тип уйлай. Аҡсаны түләр алдынан бирергә кәрәк был һорауҙы. Коммуналь хеҙмәткә ҡағылышлы документтарҙа барыһы ла асыҡ яҙылған, бер аҙ ваҡыт бүлеп, уҡып сығырға ғына кәрәк. Бөгөн бер нәмә лә белмәйенсә, тыныс йәшәп булмай. Тыныс йәшәйем, тиһәң, мәғлүмәтле булырға, хоҡуҡтарыңды белергә кәрәк. Законды белмәү яуаплылыҡтан азат итмәй, урыҫтар әйтмешләй.

Компьютерҙа уйындар уйнап ваҡыт уҙғарғансы, 354-се һәм 603-сө ҡарарҙарға күҙ йүгертеп, танышып сыҡһалар ҙа мәғлүмәт алыр инеләр. Унда торлаҡ хужалыҡтарын нисек алып барырға, коммуналь хеҙмәткәрҙәр ниндәй эш менән шөғөлләнә, нисек эшләргә тейеш, халыҡҡа ниндәй ярҙам күрһәтелергә тейеш - барыһы ла асыҡ яҙылған. Бигерәк тә дөйөм йорт ихтыяжы (ОДН) өсөн түләү буйынса бәхәстәр күп тыуа. Йортто йылытыуҙан тыш, башҡа бөтә коммуналь хеҙмәт өсөн күршеләрҙең бурыстарын күмәкләп түләргә кәрәк була. Ҡағыҙға нимә яҙылған, шуға ҡарап аҡсаһын сығарып һалырға әҙер тороусылар аптырата. Ай һайын һыу, электр энергияһы, газ күрһәткестәре буйынса ғына иҫәпләп түләргә кәрәк тә бит. Һыу һәм электр энергияһы өсөн күберәк сумма теркәлгән ҡағыҙ килә икән, идара итеүсе компаниянан аңлатма биреүҙәрен талап итергә мөмкин. Иң мөһиме, үҙ хоҡуҡтарыңды белергә һәм яҡлап өйрәнергә кәрәк. Мәғлүмәт заманында йәшәйбеҙ икән, үҙ мәнфәғәтебеҙҙә ҡулланайыҡ ул мәғлүмәттәрҙе.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Тыуған телдәге матбуғат баҫмаларын уҡыйһығыҙмы, алдыраһығыҙмы, алдырмаһағыҙ, сәбәбе ниҙә?

**(Башы 1-се биттә).**

***Ансар НУРЕТДИНОВ, "Башҡортостан" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе, Нефтекама ҡалаһы:*** Хеҙмәт юлымды матбуғаттан башлағас, гәзит-журналдарға яҙылыуҙан туҡтағаным юҡ. "Башҡортостан" гәзитен хәреф таный башлағандан бирле уҡыйым, шуға ла тәү сиратта уға яҙылам, шулай уҡ "Йәншишмә"гә, "Башҡортостан ҡыҙы"на, Нефтекама ҡала гәзитенә, ошонда уҡ 5 районға башҡортса сыҡҡан "Ҡурай" гәзитенә яҙылам. "Киске Өфө" гәзитенең электрон вариантын уҡыйым; "Ағиҙел" һәм башҡа журналдарҙы китапхананан алып уҡыйым. Ә инде матбуғат баҫмаларына ни өсөн яҙылмауҙың халыҡ үҙе әйткән сәбәбенән сығып дөйөмләштергәндә, шундай картина күҙ алдына баҫа: хаҡтар ныҡ ҡиммәт. Тағы бер сәбәп: баҙар иҡтисады шарттарында почта ла магазин-баҙарға әйләнде (нимә генә һатмайҙар унда), матбуғат таратыу улар өсөн иң һуңғы планда. Һөҙөмтәлә, почтальондар илке-һалҡы эшләй, гәзитте ваҡытында килтереү генә түгел, бөтөнләй килтермәү ҙә - улар өсөн ғәҙәти хәл: эш хаҡының түбән булыуына һылтаналар. Матбуғат таратыу иң һуңғы планда булғас, етәкселектән контроль юҡ; "революциянан" (1991) һуң кадрҙар менән эшләү "үлгәнлектән", почта етәкселегендә лә осраҡлы халыҡ йыйылды: улар матбуғатты ғына түгел, яҙылыусылар хаҡында ла бөтөнләй уйламай.

***Артур ИҘЕЛБАЕВ, "Йәшлек" гәзитенең 1991 - 1994 йылдарҙағы мөхәррире:*** Матбуғат баҫмаларына хәҙер инде ике-өс йыл тирәһе яҙылмайым, сөнки барлыҡ мәғлүмәтте онлайн режимында интернеттан һәм социаль селтәрҙәрҙән алам. Сөнки был сығанаҡтар мәғлүмәтте бик тиҙ тарата. Уйлап ҡарағыҙ, матбуғат баҫмаларында мәғлүмәт ике-өс көнгә, хатта аҙналарға һуңлап сыға, гәзит-журнал алдырыусыға ул почта аша тағы ла һуңлабыраҡ барып етә. Шуға ла матбуғат баҫмаларын алдырып уҡыусы менән дә кире бәйләнеш юҡ. Мәҫәлән, мин мәғлүмәтте алыу менән әңгәмә ҡорорға, үҙемдең фекеремде белдерергә һәм башҡаларҙы ишетергә, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға теләйем. Ә инде атап киткән сәбәптәр һөҙөмтәһендә баҫма матбуғат халыҡҡа мәғлүмәтте лә, фекер алышыу, бәхәсләшеү мөмкинлеген дә һыуытып ҡына алып барып еткерә...

***Айгизә АСҠАРОВА, Хәйбулла районы гәзите хәбәрсеһе:*** Гәзит-журналдарға яҙылыу буйынса әле килеп тыуған хәлдең төп сәбәбе барыбер ҙә ҡиммәтселектәлер. Бына былтыр беҙҙең район гәзитенә яҙылыу 812 һум булды. Ауылдарға гәзитебеҙҙе яҙҙырырға сығабыҙ, "Ай, ҡиммәт бит!" тип һөйләнә-һөйләнә, күберәк пенсионерҙар яҙыла. Ә йәштәр: "Мин бит 5 мең эш хаҡына эшләйем, 2 меңен кредит өсөн түләйем, нисек ул ғына аҡсаны балалар ауыҙынан өҙәйем мин? Гәзиткә яҙҙырғансы, ул 800 һум аҡсаға бер балама итек һатып алам", - тиҙәр. Уларға нисек һүҙ тейҙерәһең инде шулай булғас.

Гәзитегеҙҙә уҡырлыҡ нәмә юҡ, тигән дәғүә лә сәбәптәрҙең береһе икәнен танымай булмай. Редакцияла гәзиткә яҙҙырыу менән генә шөғөлләнеүсе хеҙмәткәр тотоу мөмкинлеге юҡ, был эш менән хәбәрселәр шөғөлләнергә мәжбүр, тимәк, уның аналитика, ҡыҙыҡлы материалдар яҙырға ваҡыты ла, мөмкинлеге ла ҡалмай. Шунан гәзит нисек ҡыҙыҡлы, уҡымлы булып сыҡһын инде...

***Морат ЛОҠМАНОВ, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы журналисы:*** Гәзит-журналдарҙан, аҡса юҡ, тип баш тартыу ҡурҡыныс һығымталар яһата. Кәрәк булғас, эскән, күңел асырға ятраҡан кеше алкоголле эсемлектәр өсөн аҡса таба бит. Әммә ул уҡырға теләгән хәлдә лә гәзиткә яҙҙырыу әмәлен тапмаҫҡа мөмкин. Шуға ла милли телдәге китаптар, матбуғат баҫмаларын уҡымай башлау, әлбиттә, тыуған телде насарыраҡ белеүгә түгел, ә күңелдәге ҡиммәттәр алышыныу менән бәйләнгәндер, тип уйлайым. Ҡөрьәнде лә, ҡыҙыҡ түгел, тип табырға мөмкиндәр, әммә унан ләззәт алырға өйрәнгән кеше был китаптан һис айырыла алмаҫ.

Интернет та сәбәп түгел милли матбуғат менән дуҫлыҡты емереүгә. Йәштәр интернетта әҙәби әҫәр, рухи ҡиммәттәр тураһында уҡып ултырмай һәр хәлдә. Был сығанаҡ аша ул йышыраҡ сәйәси ығы-зығы, кем кемде үлтергән, отҡан, тигән мәғлүмәт, башҡа сүп-сар менән тултыра башын. Тимәк, беҙ тәрбиәлә лә, тормошта ла икенсе төшөнсәләргә өҫтөнлөк бирә башланыҡ, милли матбуғаттан айырылыуҙың да төп сәбәбе ошондалыр, тим.

Ғөмүмән, был хәлдең сәбәптәрен эҙләп, фекер алышыуҙы дауам итергә кәрәктер ул, ләкин, тапҡас, шул сәбәптәрҙе һылтау итеп ултырмаҫҡа, уйланырға, хәлде төҙәтергә ашығырға кәрәк. Юҡһа... Әлеге быуынды ысынлап та рухһыҙ, шул уҡ тыуған телгә лә битараф быуын алыштырыуы бар. Ә рухһыҙ, ҡиблаһыҙ халыҡ менән идара итеүе еңел...

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. 50665 индекслы гәзитебеҙгә - 485 һум 40 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ.**




Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Ноябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 2 кеше **Әхмәр Үтәбайҙың "Сәхрә"**, 2 кеше **Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис..."**, 3 кеше **"Бураҡаевтар ижады"**, 10 кеше **2017 йылға "Башҡортса дини календарь"**, 10 кеше **"Шайтан хәйләләре"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында 2017 йылда пенсионерҙың йәшәү минимумын 8015 һум күләмендә билдәләгән закон проекты тәүге уҡыуҙа ҡаралды. "Балиғ булмағандарҙың эштәре һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса комиссиялар тураһында"ғы законға үҙгәрештәр индерелде. Ул балиғ булмағандар араһында суицидтарҙы иҫкәртеү буйынса эшкә иғтибар йүнәлтә. Закон проекты авторҙары фекеренсә, социаль хәүефле хәлдә ҡалған баланы ваҡытында асыҡлау һәм уның менән комплекслы эш алып барыу - иҫкәртеүҙең төп йүнәлештәренең береһе.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Вьетнамдың Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Нгуен Тхань Шон етәкселегендәге рәсми делегация менән осрашты. Билдәләнеүенсә, 2015 йылда Башҡортостандың ошо ил менән тышҡы сауҙа әйләнеше күләме 15,1 миллион доллар тәшкил иткән, ошо сумманың төп өлөшө экспортҡа тура килә. Вьетнамға нигеҙҙә синтетик каучук оҙатыла. Беҙгә уйынсыҡтар, кейем-һалым, күн сумкалар килтерелә. Башҡортостанда Вьетнам капиталы ҡатнашлығында ойошторолған 24 предприятие эшләй.

✓Башҡортостан Хөкүмәте һәм "Роснефть" араһында глобаль килешеү төҙөләсәк. Документтың тексы ай дауамында әҙер буласаҡ. Килешеүгә йыл аҙағына тиклем ҡул ҡуйыу күҙаллана. Был хаҡта журналистарға "Роснефть" нефть компанияһының төп башҡарма директоры Игорь Сечин менән осрашыу йомғаҡтары буйынса республика Башлығы Рөстәм Хәмитов һөйләне. Килешеүҙә үҙ-ара эш итеүҙең бөтә аспекттарын күрһәтеү ҡаралған. Яҡтар "Башнефть" компанияһының республика алдындағы дивидендтар, хәйриә, һалымдар буйынса йөкләмәләрен һаҡлау тураһында һөйләшеп килешкән.

✓"Башнефть" компанияһының республика ҡарамағындағы акциялар пакеты һатылмай, тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов. "Компанияға берлектә идара итәсәкбеҙ. Акционер килешеүенән тыш, социаль килешеү ҙә булыр, моғайын. "Башнефть" үҙаллы бүлендек компания булып ҡала", - тине Рөстәм Хәмитов. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Хөкүмәте бойороғона ярашлы "Роснефть" "Башнефть" компанияһы акцияларының 50,075 процентын 329,7 миллиард һумға һатып алды.

БЫЛ АЙҘА...

# ҠЫРПАҒАЙҘА - НИ АРБА, НИ САНА

**"Элек, беҙ йәшерәк саҡтарҙа..." тип һөйләр көндәр ҙә килеп еткән, имеш... Эйе, ул саҡтарҙан бирле ни замандар үтте күҙ алдынан. Күп нәмәләр "баштүбән" үҙгәрҙе хатта. Ана шул элгәрерәк ноябрь айы тыуыр-тыумаҫтан күңелле ығы-зығы башланыр ине: халыҡ зыу килеп, "үктәбер" байрамына әҙерләнә, беҙ, мәктәп балалары, көн һайын ҙур байрам концертының репетицияларын үткәрәбеҙ...**




Ҡыҫҡаһы, ай башы беҙҙең өсөн ул заман **7**-һенән - Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы көнөнән башлана ине. Яҡшы булғанмылыр был, әллә хаталаныуымы - һәр хәлдә, беҙ ысын күңелдән матур киләсәгебеҙгә ышанып, Ленин бабай хаҡында шат йырҙар йырлап үҫтек. Тик бына ышанысыбыҙ ғына аҡланманы: мәңге ҡаҡшамаҫ һымаҡ тойолған тотош система үҙенең юғары идеалдары, ләкин ҡоллоҡ идеологияһына ҡоролған тәғлимәте менән бергә ҡыйралып, "һә" тигәнсе юҡҡа сыҡты... Шуға ла беҙ хәҙер элекке "оло" был байрамды календарь битенән ғәйепле төҫтә шым ғына ҡарап үтәбеҙ. Әйтерһең дә, түше тулы орден-миҙаллы генералды, погон-наградаларын йолҡоп алып, ябай бер йәлләнес кенә һалдатҡа әйләндереп ҡуйҙылар. Уның ҡарауы, ҡеүәтле генералиссимустар урынын Минин менән Пожарский алды. Улар Рәсәй халҡын берҙәмлеккә саҡырып тора, тинеләр (**4 ноябрь**).

Тик бына берҙәмлек кенә һиҙелмәй рәсәйҙәр араһында: байҙар ҡатламы ябай халыҡтан бик ныҡ айырылды бөгөн, улар һаман ил ҡаҙнаһын нисек итеп сит ил офшорҙарына сығарыу яйын ғына ҡарап тик ята. Ә беҙҙең Финанс һәм Хеҙмәт министрлыҡтары һаман булһын ябай халыҡтың тишек кеҫәһен ҡапшапмы-ҡапшай, уның яшыҡ ҡына елкәһенә бөтмәҫ һалымдар һалыу яйын ҡайғырта. Эшһеҙгә түләү һалырҙан алда уны эш менән тәьмин итеү кәрәк тә бит. Ни ғилләлер, элгәре халыҡты яҡлап сыға торған профсоюздары ғәйеп булды. Ә бына календарҙа уларҙың байрамы тороп ҡалған (**12**) - ғәжәп!

Байрамдарҙы яратабыҙ ҙа шул. Әлдә, тим, Масляковтың шул шуҡ егеттәре бар, бәғзе бер ҡырын эштәрҙе тиҙ генә элеп алып, сәхнәгә сығарып та ҡуялар. Халыҡ-ара КВН - Шаяндар һәм тапҡырҙар көнө революция көнөнөң тап иртәгәһенә (**8**) тура килеүен әйт әле һин уның. Шулай инде беҙҙең тормош - тотош трагикомедия: бер ҡараһаң - көлкө, бер ҡараһаң - ҡыҙғаныс... Хәрби разведчик көнөнөң (**5**) Бөтөн донъя ирҙәр көнө менән тап килеүенә лә тос ҡына кинәйә һалынған кеүек: бөгөн уйлап та тормай улар менән "разведкаға" барырҙай ир-егеттәребеҙ күпме ҡалып килә икән? Бына ҡыҙыҡ... Әллә ҡыҙғанысмы? Бер һүҙ менән әйткәндә, айҙың асылы ла шул бит: ни арба, ни сана - аптыраҡ!

Артабан гел етди көндәр китә былай: фашизм (ғәфү итегеҙ, был һүҙҙе ҙур хәреф менән яҙырға ҡул тартмай), расизм һәм антисемитизмға ҡаршы Халыҡ-ара көн (**9**), РФ Эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре һәм Бөтөн донъя йәштәр көндәре (**10**), Бөтөн донъя диабетҡа ҡаршы көн (**14**), Башҡортостан өлкә шураһы тарафынан РСФСР составында Башҡортостан автономияһы иғлан ителгән көн (**15**), Бөтөн донъя студенттар һәм Бөтөн донъя тәмәкенән баш тартыу көндәре (**17**), Бөтөн донъя бала көнө (**20**), РФ һалым органдары хеҙмәткәрҙәре һәм Телевидение көндәре (**21**), Әсә көнө (**27**). Әйткәндәй, 2015 йылдың тап ошо көнөндә Бөтөн донъя башҡорттарының IV ҡоролтайы асылды. Ә бына шул көндән 98 йыл элек Рәсәй дәүләтенең федератив өлөшө булараҡ, Башҡортостан милли-территориаль автономия барлыҡҡа килгән (**1917 йылдың 29 ноябре**). Үҙебеҙҙең тарихты йыллап түгел, айлап, көнләп белергә бурыслыбыҙ, йәмәғәт.

**Ҡырпағайҙа тыуғандар:**

**1** - тел белгесе, педагогика фәндәре докторы, профессор **Лена Сәйәховаға** - 85 йәш (1931).

**-** билдәле драматург **Мирхәйҙәр Фәйзиҙең** тыуыуына - 125 йыл (1891-1928).

**-** Башҡортостандың халыҡ артисы **Вәлит Илембәтовҡа** - 60 йәш (1956).

**2 -** прозаик һәм драматург **Мөҙәрис Багаевҡа** - 65 йәш (1951).

**7 -** билдәле драматург, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ, Дуҫлыҡ, Салауат Юлаев ордендары кавалеры **Нәжиб Асанбаевтың** тыуыуына - 95 йыл (1921-2013).

**-** прозаик, публицист, йыраусы һәм сәсән **Спартак Ильясовҡа** - 75 йәш.

**13 -** һәләтле ғалим, антрополог һәм этнограф, тарих фәндәре кандидаты **Ринат Йосоповтың** тыуыуына - 65 йыл (1951-2011).

**15 -** бейеүсе, Башҡортостандың халыҡ артисы Ратмир Бәҙретдиновҡа - 85 йәш (1931).

**-** билдәле тарихсы, этнограф, тарих фәндәре докторы, профессор **Рим Янғужиндың** тыуыуына - 75 йыл (1941-2007).

**17 -** БР "Башҡортостан энциклопедияһы" ғилми нәшриәт комплексы директоры, философия фәндәре кандидаты, техника һәм фән өлкәһендә БР Дәүләт премияһы лауреаты, "Почет билдәһе" ордены кавалеры **Уйылдан Сәйетовҡа** - 65 йәш (1951).

**22 -** әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, профессор, Халыҡ-ара төрки академияһы академигы **Ғиниәтулла Ҡунафинға** - 70 йәш (1946).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ҺОҠЛАНҒЫБЫҘ КИЛӘ!



**Бер ҡанатлы һүҙ бар бит: "Уян да, йырла!" Эйе, мин уянам да, радионы ла асмай, телевизорҙы ла тоҡандырмай, көйләйем. Сөнки минең күңелем тулы моң. Йәшлегемдә тыңлаған моңдар улар. Бер таңда бер йыр биҙәй күңелемде, икенсе таңда - икенсе йыр. Ә ҡайһы бер йырҙарҙы аҙна буйы тын ғына, үҙ алдыма ғына йырлап йөрөйөм.**

Бала саҡ, йәшлек хәтерем һәйбәт минең. Бына әле Баныу Вәлиеваның "Һалҡын шишмә" йыры күңелемдә яңғырай.

*Тау аҫтында һалҡын шишмә,*
*Ағып китә йыраҡҡа.*
*Шул шишмәнең һыуын эсһәм,*
*Көс аламын йөрәккә.*

Баныу Вәлиеваның гүзәл тауышы үҙе лә шишмәләй сылтырап иҫтә ҡалған. Баныу Вәлиева хатта Мәскәүҙең Ҙур театрында Сергей Лемешев менән йырлаған. Лемешев уны "Несравненная Бану!" тип атаған.

Рәми Ғариповтың "Таңғы йыр" шиғыры ла иҫкә төшә.

*Ниңә моңло икән таңдағы йыр?*
*Ярып керҙе ул йыр йөрәккә.*
*Төпһөҙ упҡындарға осҡан мәлдә*
*Таяндым мин ошо терәккә.*

Ул шиғырҙы Роза Сәхәүетдинова скрипка моңо менән биҙәне, скрипка моңо кеүек сағыу тауышы менән Нажиә Аллаярова халыҡҡа йырлап ишеттерҙе. Һәр береһе бөйөк: шағиры ла, композиторы ла, йырҙы башҡарыусыһы ла. Уйланһаң, ҡурҡып та китәһең: "Йәштәр ул йырҙы элекке юғары кимәлендә башҡара алырмы? Ул йырҙарҙы әллә шул сәбәпле йырламайҙармы?" Күреп-белеп йөрөйбөҙ бит: күптәрҙең артист, йырсы ғына булғылары килә. Бер йырсының тауышы көслө, әммә моңо юҡ. Икенсеһенең моңо бар - тауышы бәләкәй генә. Ана өҙөләм, бына өҙөләм, тип тора.

Күптән түгел бер оло йәштәге йыр уҡытыусыһының сығышын тыңлағайным. Ул: "Йырсы һөнәрен һайлар алдынан көҙгөгә ҡарағыҙ, матур тауышҡа матур йөҙ, матур буй-һын тап килергә тейеш", - тине. Әлбиттә, тауышың матур булып та, матур йөҙөң, килешле буй-һының булмаһа ла, радио аша йырларға була. Ләкин бөгөн мәғәнәһеҙ һүҙҙәрҙе нисек булһа ла рифмалап, шуларҙы үҙҙәре көйгә һалып, үҙҙәре башҡарыусылар күбәйҙе. Үҙҙәре лә яфалана, тыңлаусы, тамашасы ла. Етмәһә, хәҙер йәш йырсыларҙың һәр береһе: "Мин башҡорт йырын донъя кимәленә сығарырға хыялланам", - тип ҡабатлап, күкрәк ҡаға. Тик башта мәшһүр йырсыларыбыҙ кимәлендә йырларға өйрәнергә кәрәк бит әле. Ә уларҙың тәкәбберлектәренән башҡа бер нәмәһе лә юҡ һымаҡ.

Беҙ йәш саҡта ла бер мәл "тауышһыҙ йырсылар" булып алды. Тик ул осор бик ҡыҫҡа булды. Барыбер иң гүзәл, иң һоҡландырғыс тауышлылар ҡалҡып сығып, сәхнәне, экранды биҙәне. Хәҙер ҙә шулай булыр, тип ышанғы килә. Һоҡланғыбыҙ килә бит...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Роснефть" етәксеһе Игорь Сечиндың "Башнефть" компанияһының Директорҙар советы составына инергә тәҡдим итеүенә аңлатма бирҙе. Рәсәй энергетика форумы барышында уҙған брифингта Рөстәм Хәмитов ысынлап та ошондай тәҡдим алыуын һәм әле уны ҡарауын раҫланы. "Башнефть" компанияһы акционерҙарының сираттан тыш йыйылышы 16 декабргә билдәләнгән.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика биләмәһендәге фармацевтика предприятиелары эшмәкәрлеге менән танышты. "Иммунопрепарат" - инфекция, аллергия һәм соматик сирҙәрҙе диагностикалау, иҫкәртеү һәм дауалау өсөн дарыуҙар әҙерләү, сығарыу буйынса Рәсәйҙең һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренең ҙур ғилми-сәнәғәт комплексы. Бында 62 препарат һәм 121 иммунобиологик препарат, шул иҫәптән йоғошло ауырыуҙарға ҡаршы вакциналар етештерелә. "Фармстандарт-Өфөвита" асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә иһә 140 дарыу һәм 13 биологик яҡтан әүҙем өҫтәмә эшләп сығарыла.

✓Өфөлә, республиканың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығында, "Рус география йәмғиәтенең ассоциацияланған мәктәптәре" проекты республика советының тәүге киңәйтелгән ултырышы уҙҙы. Ултырышта 21 кешенән торған республика советы составы раҫланды. Рус география йәмғиәтенең ассоциацияланған мәктәбе статусы билдәләнгән йүнәлештәр буйынса һөҙөмтәле, сифатлы эшләгән өсөн бирелә.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү программаһын тормошҡа ашырыу йомғаҡтары тикшерелде. Быйыл программала 661 проект ҡатнаша. Шуларҙың 487-һе конкурс буйынса һайлап алынған һәм ҡаҙнанан финанслана. 2016 йылда республика бюджетынан ошо маҡсатта 300,7 миллион һум аҡса бүленгән. Ауыл районадарында күбеһенсә мәғариф һәм мәҙәниәт учреждениеларын (25 процент), юлдарҙы (18), һыу менән тәьмин итеү системаларын (12,4) ремонтлау, зыяраттарҙы тәртипкә килтереү (11) һәм тораҡ пункттарҙы төҙөкләндереү (10) өҫтөнлөк итә. Ҡалаларҙа спорт объекттары ҙур һорау менән файҙалана - 41,4 процент.

БАШ ҠАЛАМ...

# УЛ ӘКИӘТТӘ МИН ДӘ БАР!

**Республикамдың йөрәге булған Өфө ҡалаһы йылдың һәр миҙгелендә һәм тәүлек әйләнәһенә матур. Мин тәүҙә көндәлек ығы-зығы, мәшәҡәттәрҙән ялға туҡтап, күп йорттарҙа уттар һүнгәс, төнгө ҡала буйлап сәйәхәт ҡылырға саҡырам.**

Бала сағым үткән боронғо үҙәктең тар урамдарынан уҙһағыҙ, унда хәҙерге ваҡытта "кешелектең бөйөк төҙөлөшө" тип аталған яңы бетон ҡоролмалар бөтөнләй юҡ икәнлегенә иғтибар итегеҙ. Якутов паркы эргәһенән үткәндә, уның эсенән илаһи тынлыҡ, тыныслыҡ бөркөлөүен тойорһоғоҙ. Иреҡһеҙҙән үҙегеҙҙе лә быҒаса кисермәгән тыныслыҡ хисе солғап алыр һәм: "Миллиондан ашыу кеше ҡайҙа икән, барыһы ла йоҡлаймы икән ни?" - тип уйларһығыҙ. Төнгө уйҙар ҡалаһы көндөҙөн ҡырмыҫҡа иләүе кеүек мыжғый. Ә иртән барыһы ла ашыға: кем эшкә, кем уҡыуға, кемдер ваҡ-төйәк мәсьәләһен хәл итергә. Бындай ығы-зығы һәр ҡалала күҙәтелә, әммә минең Өфөмдә ял итеү өсөн дә урындар бик күп. Шуларҙан иң яратҡандары тураһында һөйләгем килә.

Беренсе "оазисым" - Кариҙел яры. Һыу сығанағы эргәһендә ял итеүҙән дә шәберәк нәмә бармы икән! Тирә-яғын урман уратып алған йылға әкиәти күренә. Ағастар тере йән кеүек, һәр ҡайһыһының үҙ тарихы бар, бары тик уларҙан үҙ тарихын һөйләүен һорарға ғына кәрәк... Бына-бына ҡарт имәндән тылсымсы осоп сығыр, ә ҡайын урман эйәһенә әүерелер кеүек. Урмандың хозурлығына һоҡланып, нисек ҡабат йылғаға килеп сыҡҡаныңды ла һиҙмәйһең. Ҡояш нурҙары аҫтында ул йәйғор төҫөндә емелдәп, күҙҙе ҡамаштыра. Ҡурай еләге һәм бөрлөгән ҡыуаҡтарын йырып сыҡһаң, аҡланға юлығаһың. Еләҫ кенә иҫкән елгә үләндәр шыбырлаша, уларға ҡоштарҙың моңло йыры ҡушыла. Шәп!

Икенсе ятаҡан урыным - башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев исемендәге майҙан. Бында мине Ағиҙелдең күренеше һоҡландыра. Буш ваҡытымды ошонда үткәрергә яратам. Ҡыҙыҡлы китабыңды алып ултыраһың да, икенсе мөхиткә сумаһың, ә ел, һинә ярҙам итергә теләгәндәй, китаптың биттәрен асҡылай. Әкиәт донъяһынан сығырға теләмәйһең, ләкин ҡояш апай ҡайтырға ваҡыт икәнен иҫкәртә. Алтын нурҙар һине китап эсенән һөйрәп сығарырға теләгәндәй, сәстәреңдең араһына инеп йөшеренә, йылы нурҙар битеңдә ҡытыҡлай. Күҙҙәреңде китаптан айыраһың һәм... әкиәт тамамлана. Юҡ, юҡ, янылышҡанмын, ул артабан дауам итеп, һуҡмаҡтан ғашиҡтарҙың яратҡан урыны булған аҫылмалы күпергә йүгерә. Ә мин уның артынан ҡыуалайым...

Һәр кешенең үҙенә генә хас характеры булған кеүек, минең Өфөм дә үҙенсә матур, үҙенсә тыныс, үҙенсә аҡыллы. Күнел торошо ла, һауа торошо кеүек үҙгәреп тороуға ҡарамаҫтан, ул минә барыбер ҙә мөғжизәле бер әкиәт иле кеүек. Иң мөһиме - ул әкиәттә минең дә урыным бар!

**Мария ВОРОНОВА,**
**Өфөләге 6-сы лицейҙың 11-се синыф уҡыусыһы.**

АФАРИН!



# ӨФӨБӨҘ АРТАБАН ДА КҮРКӘМЛӘНӘСӘК!

**(Башы 1-се биттә).**

Шулай уҡ үҙ сығышында Рөстәм Зәки улы ҡала алдында торған тәү сираттағы бурыстарҙы ла билдәләп үтте. Иң элек ҡала ерҙәрен һөҙөмтәле файҙаланырға кәрәк, тине ул. Ҡала бюджетының килем өлөшөн арттырыу, ҡаланы төҙөкләндереү, заманса йәмәғәт транспорты системаһы мәсьәләләре менән бер рәттән, төбәктең Европа һәм Азия сигендә урынлашҡан, ике цивилизацияға ҡараған мәҙәниәтен үҫтереү зарурлығына ла иғтибар йүнәлтте.

Үҙенең сығышында ҡабаттан һайланған ҡала башлығы уҙған осорҙағы ҡаҙаныштарҙы билдәләп, киләсәктә ошо алынған йүнәлеш буйынса эшмәкәрлекте дауам итеү кәрәклегенә баҫым яһаны һәм алда торған мөһим бурыстарға туҡталды.

**Стратегик планлаштырыу.** Бынан ике йыл элек эшләнә башлаған Өфө ҡалаһын үҫтереүҙең стратегик планын тамамлап ҡуйырға һәм Генераль планға иғтибар йүнәлтергә. Стратегик пландың ҡушымтаһы булған Өфөнөң Төньяҡ өлөшөн комплекслы үҫтереү планы нигеҙендә Дим, Шаҡша, Затон, Нижегородка биҫтәләре буйынса ла алдағы 5-7 йылды күҙаллаған шундай уҡ пландар эшләргә.

**Бюджет, иҡтисад үҫеше.** Программалар нигеҙендә ҡабул ителгән бюджетҡа күсеү һуңғы йылдарҙың иң мөһим яңылығының береһе. Әлеге ваҡытта 22 муниципаль программа тормошҡа ашырыла. Улар бюджет ассигнованиеларын аныҡ эшкә йүнәлтеү һәм һөҙөмтәләр алыу мөмкинлеген бирҙе.

**Йәшәйеш уңайлылығын хәстәрләү.** Һуңғы йылдарҙа ҡалала төҙөкләндерелгән һәм реконструкцияланған яңы ял урындары барлыҡҡа килде. Ошо йүнәлештә эшләү "Парк эсендәге ҡала" концепцияһына нигеҙ һалды. Алдағы йылдарҙа Өфөнөң төньяҡ өлөшөндә лә ошондай урындар барлыҡҡа киләсәк.

**Ҡала мөхитенең именлеге.** Өфө дүрт йыл рәттән Волга буйы федераль округында халыҡтың имен тормошон тәьмин итеү буйынса иң яҡшы ҡала тип танылды. Бында "Имен ҡала" системаһы үҫешкән һәм киләсәктә уны артабан да камиллаштырыу йүнәлешендә эштәр алып барыласаҡ.

**Торлаҡ төҙөлөшөнөң сифатын күтәреү.** Бөгөн торлаҡтың сифатын яҡшыртыу һәм уны һатып алыу хаҡтарының юғары булмауын тәьмин итеү - төп шарт. Бының өсөн төрлө йүнәлештә эшмәкәрлек алып барыла. Өфөлә төҙөлгән һәр торлаҡ йорт - ҡаланың биҙәге булырға тейеш. Был йәһәттән ыңғай миҫалдар бар һәм уны тағы ла киңәйтергә кәрәк.

**Иҫке һәм авария хәлендәге йорттарҙы һүтеү.** Бөгөн баш ҡала был программаны тормошҡа ашырыу буйынса алдынғыларҙың береһе. Йыл һайын был маҡсатҡа 1,5 миллиард һум тотонола һәм 500-ҙән ашыу ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшырта.

**Социаль инфраструктураны үҫтереү.** Социаль объекттар, балалар баҡсалары төҙөү өсөн сикләнгән финанс тәьминәте шарттарында яңы сығанаҡтар табыу, федераль программаларҙа ҡатнашыу, финанслауҙың һәм төҙөлөштөң яңы схемаларын ҡулланыу кәрәк. Шулай уҡ муниципаль-шәхси партнерлыҡ принциптары буйынса проекттарҙы тормошҡа ашырыу эшмәкәрлеге лә әүҙемләштереү талап итә.

**Йорт ихаталарын, торлаҡ фондын капиталь ремонтлау һәм төҙөкләндереү.** Һуңғы йылдарҙа 676 ихата объекты ремонтланған, яңы парковка урындары булдырылған, ваҡытлыса парковкалар эшләнгән, 223 балалар майҙансығы һәм спорт-уйын комплекстары ҡуйылған. 270 уйын майҙаны төҙөләш компаниялары тарафынан сафҡа индерелгән. Был эш киләсәктә лә дауам ителәсәк.

**Инвестициялар йәлеп итеү.** Инвестициялар күләме 92 миллиард һумдан (2011) 147 млрд һумға тиклем артты (2015). Алда тағы ла инвесторҙар йәлеп итеү, улар өсөн ыңғай мөхит булдырыу, ҡала өсөн өҫтөнлөклө булған проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа ярҙам итеү бурысы тора.

**Юл-транспорт инфраструктураһын үҫтереү.** Халыҡ фекерен өйрәнеү һөҙөмтәһендә ҡала райондары араһында ниндәй транспортҡа ихтыяж булыуы асыҡланып, хәрәкәт итеү матрицаһы эшләнә. Ул артабан юл-транспорт инфраструктураһын үҫтереүгә нигеҙ булып тораса́к. Шулай уҡ пассажирҙар йөрөтөүсе транспортты яңыртыу буйынса ла эш алып барыласаҡ.

**Сәнәғәт секторын үҫтереү, эшҡыуарлыҡ субъекттарына ярҙам итеү.** Бөгөн Өфө Рәсәйҙең 250 сәнәғәт үҙәге араһында - 7-се, халҡы миллион булған ҡалалар араһында үҙе етештергән продукцияны оҙатыу күләме, күрһәтелгән эш һәм хеҙмәт буйынса икенсе урын биләй. Совет осоронан һуң баш ҡалала 100 "яңы иҡтисад" предприятиеһы асыла. Шулай уҡ АйТи өлкәһенең дә ҡеүәте ҙур.

**Инновацион эшмәкәрлек.** Дүрт йыл элек ҡала хужалығының барлыҡ тармаҡтарында ла яңылыҡтар индереүгә йүнәлеш алынған һәм был эште артабан да дауам итергә кәрәк.

**Халыҡ араһында әүҙем гражданлыҡ позицияһын булдырыу.** Муниципалитетҡа халыҡ фекере бик мөһим. Шуға күрә төрлө мәсьәләләр буйынса асыҡ тыңлауҙар ойоштороу, социологик һорау алыуҙар үткәреү тәжрибәһен дауам итеү мөһим. Йәштәрҙе ҡаланы үҫтереү буйынса стратегик мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ылыҡтырыу ҙа кәрәк. Бында төп баҫымды эшкә урынлаштырыу, гражданлыҡ-патриотик һәм рухи-әхлаҡи тәрбиәгә, ял ваҡыттарын файҙалы үткәреүгә, сәләмәт тормош алып барыу өсөн шарттар тыуҙырыуға яһау зарур.

**Закондар сығарыу инициативаһы.** Урындарҙа эшләгән муниципаль хеҙмәткәрҙәр көндәлек мәсьәләләрҙе хәл иткәндә урындағы үҙидаралыҡҡа ниндәй проблемаларҙы хәл итергә кәрәклеген яҡшы белә. Тап улар ҡала Советы депутаттары менән берлектә ошо мәсьәләләрҙе сисеү өсөн республика, федераль кимәлдәге закондар сығарыу органдарына инициатива менән сыға ла инде.

**Шулай итеп, тезистар формаһында ғына бирелгән ошо төп йүнәлештәрҙән һәм уларҙың һөҙөмтәһенән дә бөгөн Өфөлә ниндәй эшмәкәрлек алып барылғанын төҫмөрләргә мөмкин. Һәм ҡала Советы депутаттарының, атты кисеүҙә алыштырмайҙар, принцибын алға һөрөп, Ирек Ишмөхәмәт улына ике мөҙҙәт алда башлаған эштәрен, пландарын тормошҡа ашырып бөтөү мөмкинлеген биреүе лә яҡшы һәм был мегаполистың артабанғы үҫеше өсөн дә файҙалы булыр, тип ышанғы килә.**

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әҙерләнә.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Төркиәнең Измир ҡалаһында халыҡ-ара шашка буйынса Европа чемпионаты тамамланды. Пьедесталдың тәүге баҫҡысында - Айгөл Изрисова (Өфө) һәм Алексей Чижов (Ижевск). Айгөл Изрисова туғыҙ алышта биш тапҡыр еңде һәм дөғүәселәрен бер мәрәйгә уҙып китте. Төркиәлә Европа чемпионатын рапид буйынса турнир дауам итә, унда иң шәп шашкасылар билдәләнәсәк.

✓Өфөлә балиғ булмағандар ҡатнашлығындағы юл-транспорт ваҡиғаларын иҫкәртеү маҡсатында Дәүләт автоинспекцияһы 24 октябрҙән 11 ноябрғә тиклем "Иғтибар - балалар!" иҫкәртеү операцияһын уҙғара. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың туғыҙ айында баш ҡалала балалар ҡатнашлығында 124 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, уларҙа 131 бала зыян күргән.

✓Социаль селтәрҙәрҙә легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 75 йыллығына арналған акция башланды. Теләге булған һәр кем үҙ битендә олатаһы йәки туғаны - 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугиры тураһында яҙма урынлаштыра ала. Шулай уҡ #112bashkav75 билдәһен ҡуйырға кәрәк.

✓RegionalRealty күсемһеҙ милек порталы баһалауынса, аҙыҡ-түлек кәрзиненең арзанлығы буйынса Өфө Красноярск, Силәбе һәм Омск ҡалаларын артта ҡалдырҙы. Тәүге урындарҙа Сочи, Тула һәм Рязань ҡалалары биләй. Санкт-Петербург һәм Мәскәү - дүртенсе һәм бишенсе урындарҙа. Торлаҡтың хаҡы буйынса Өфө Красноярск, Төмән, Дондағы Ростов һәм Тула менән бер рәттән уртаса позицияларҙа тора.

✓Ошо йылдың тәүге туғыҙ айында Башҡортостан халҡының тәбиғи үҫеше 2,6 мең кешенән артҡан. Коллегия ултырышында республика һаулыҡ һаҡлау министры Әнүәр Бакиров хәбәр итеүенсә, төбәктә сабыйҙар үлеме былтырғы менән сағыштырғанда - 1,3, юл-транспорт ваҡиғаһында үлем осраҡтары 1,5 тапҡырға кәмегән. Быйыл республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы 2628 операция яһау өсөн 780 миллион һум аҡса йүнәлткән. Федераль ҡаҙнанан 3251 операцияға 955 миллион һум субсидия бүленгән.

✓Өфөлә "XXI быуаттың мәғариф киңлегендә ислам идеалдары һәм ҡиммәттәре" тип аталған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция ойошторола. 9-10 ноябрҙә үтәсәк форумға Марокко, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Мысыр, Малайзия, Ираҡ, Иордания, Тунис һәм Төркиә ғалимдары килә.

✓ *Эшҡыуарҙар ҡулланыусылар кооперативына берләшеп, ҡорамалдар һатып алыу, бүлмәләрҙе продукт етештереүгә ҡулайлаштырыу маҡсатында дәүләттән 20 миллион һумлыҡ субсидия алырға мөмкиндәр.*



*ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ*



# ХӘТЕР АЛЛЕЯҺЫ КӘРӘК

Быйыл Рәсәй телевидениеһы үткәргән "Алтын бишек" конкурсында ҡатнашырға йөрьәт итһәк тә, бер кемгә лә сер түгел - ауылыбыҙ ысын мәғәнәһендә үлеп бара. Былдай күренеш бер беҙҙә генә түгел, тотош Рәсәй ауылдары шундай хәлдә. Һәм Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы рәйесе булараҡ, шуны әйтергә теләйем: ауылдарыбыҙҙы тергеҙеү, уларҙы гөрләтеү һәм йәшәтеү, беренсе сиратта, шунда йәшәгән халыҡтың әүҙемлегенә һәм урындағы власть органдарының, республика етәкселегенең беҙҙең башланғыстарҙы күтәреп алыуына бәйле.

"Йөҙ йыллыҡҡа - йөҙ объект" акцияһын хуплап һәм беҙҙең теләктәрҙе ишетеүҙәренә ышанып, шуны әйтер инем: "Алтын бишек" тапшырыуы төшөрөлгәндә Йомаҡ ауылында Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булыусылар иҫтәлегенә Хәтер аллеяһы булдырыу, шунда уҡ балалар майҙансығы эшләү һәм, иң мөһиме, ошо аллея уртаһында Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем булған мәсетте ҡабат төҙөп ултыртыу тураһында башланған һөйләшеү ауылдаштарым, бағыусылар, хакимиәт тарафынан хупланып, берлектәге көс менән тормошҡа ашырылһа, бик шәп булыр ине. Юҡһа, объекттар тигәндә, шунда уҡ ҙур эштәрҙе күҙаллайбыҙ, ҙур төҙөлөштәр тураһында хыялланабыҙ. Ә бит ауылдарҙа ла халыҡ йәшәй, донъя көтә, республикаһың үҫешенә үҙ өлөшөн индерергә тырыша, һәм улар өсөн эшләнгән бәләкәй генә эш тә үҙҙәре хаҡында хәстәрлек күреүҙең матур бер өлгөһө булып, ауыл халҡы ла онотолмағанын раҫлап торасаҡ.

**Шәһиҙә ИШҠОЛОВА, Мәләүез районының Йомаҡ ауылы.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# СЫР ЭШЛӘҮСЕ "ПИОНЕРҘАР"...



**Ошо көндәрҙә шәхси эшҡыуарҙарҙан, фермерҙарҙан һәм ошо тармаҡ менән ҡыҙыҡһынған башҡа һөнәр кешеләренән торған бер төркөм студенттар Башҡорт дәүләт университетының Аҙыҡ-түлек технологиялары факультетында асылған "Сыр эшләүселәр мәктәбе"нең беренсе баҫҡысын тамамлау тураһында таныҡлыҡ алды. Таныҡлыкты кем-кем түгел, ә республиканың төп аграрийы - БР Ауыл хужалығы министры Николай Коваленко үҙе тапшырҙы.**

- Был - оло юлдың башы ғына. "Сыр эшләүселәр мәктәбе"нең тыңлаусылары артабанғы баҫҡыс буйынса уҡыуын дауам итеп, тағы ла юғарыраҡ кимәлдәге белемгә эйә була ала. Икенсе мәсьәлә - тауарҙы һатыу мәсьәләһе. Етештерелгән тауар ҙур күләмдә, сифатлы һәм күп төрлө булһын өсөн иң яҡшыһы - инде-ингә терәп, алға барыу. Был йәһәттән дәүләт үҙ ярҙамынан ҡалдырмаҫ - икенсе йылдан дәүләт субсидияһы ярҙамында һатып алып була торған ҡорамалдар исемлегенә сыр эшләү ҡорамалдарын да индереү ҡарала, - тине министр. Ул шулай уҡ былдай етештереүҙә дәүләт ярҙамын өс төрлө юл менән алып була икәнлеген дә төшөндөрҙө. Уның һүҙҙәре буйынса, шәхси эшен йәйелдерергә иҫәп тотҡан эшҡыуарҙар ҡулланыусылар кооперативына берләшеп, ҡорамалдар һатып алыу, бүлмәләрҙе продукт етештереүгә ҡулайлаштырыу маҡсатында дәүләттән 20 миллион һумлыҡ субсидия алырға мөмкиндәр. Тик быйын өсөн сығымдарҙың 40 процентын үҙенә ҡапларға кәрәк. Икенсенән, дәүләт шулай уҡ мал-тыуар, ҡорамал һатып алырға теләгән ғаилә фермаларына ла гранттар бирә. Өсөнсөнән, дәүләт техника һәм ҡорамалдар һатып алыусыларҙың сығымдарының бер өлөшөн ҡаплай.

Сыр эшләүҙең төүге "әлебен" үҙләштереүселәр нимдәй сырҙар эшләргә өйрәнде икән, тигән урынлы ҡыҙыҡһыныу тыуыр. Моцарелла, качотта, рикотта, прима соле исем-атамалы итальян продукттары эшләргә өйрәнгән улар. Уҡыу барышында был сырҙарҙы уҡыу йортоноң ҡаҙанлығында һәр тыңлаусы үҙе эшләп, бер-беренеһең ризығын тәмләп ҡараған. "Сыр эшләүселәр мәктәбе"н тамамлаусыларҙы факультеттың "Ит һәм һөт технологияһы" кафедраһы, "Дәүләкән һөт комбинаты" белгестәре уҡытҡан, һөткә, сырҙа ҡағылған талаптар, продукттарҙың сифатын билдәләү тәртибе менән таныштырған.

Башҡортостандың иң төп ауыл хужалығы вузының өр-яңы белгестәрен "пионерҙар" тип атауыбыҙ юҡтан ғына булманы. Уларҙың ошо һүкмәктың башында тороусылар булыуына баҫым яһағы килә. Икенсенән, "пионер"ҙарҙың "комсомол" һәм "коммунист" дәрәжәләренә еткәнсе белемен камиллаштырыу мөмкинлеге тураһында ла ишаралайбыҙ. Өсөнсөнән, уларҙың ысын белгес буласағын ҡайғыртып, дәүләт тә үҙенең һәлмәк көсөн һала, тимәксебеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо материалды баҫмаға әҙерләгәндә, ауылдарҙа бынамын тигән итеп сыр эшләүсе апайҙар барлығын хәтергә төшөрөп (минең әсәйем дә бик тәмле итеп сыр ҡайната), был һөт ризығы беҙҙең халҡыбыҙҙа ла элек-электән булғанмы, юҡмы, тигән ҡыҙыҡһыныу менән милли аш-һыуҙарыбыҙ белгесе булған ағинәй Мәрйәм Бураҡаеваға мөрәжәғәт иттем. "Мин сырҙың милли ризығыбыҙ булыуы тураһында бер ҡайҙа ла мәғлүмәт күргәнем юҡ. Күп кенә тикшеренеүселәр ҡоротто "сыр" тип яҙа. Башҡа халыҡтар менән аралашыу тығыҙ була башлағас, сырҙы ла эшләй башлағандарҙыр, күрәһең. Бөгөн бит уны Күгәрсендә лә, Баймаҡта ла, Әбйәлилдә лә, башҡа райондарҙа ла өй шарттарында әҙерләйҙәр", - тип яуап бирҙе Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ТАРИХИ ЙӨҘҘӨ ЯҢЫРТЫРҒА!

✓ "Еңеү" кинотеатры алдына "Азат итеүсе яугир, эшсе һәм колхозсы" скульптура композицияһы кире урынлаштырылды. Был хаҡта былтыр оператив кәңәшмәлә телгә алып, ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов архитектура ҡомартҡыларының тарихи йөҙөн кире ҡайтарырға ҡушҡайны. Кинотеатрға нигеҙ ташы 1945 йылда һалына. Бина үҙе өс йылдан һуң төҙөлөп бөтә. Тағы ла ете йыл үткәс, уның алдына ошо композиция урынлаштырыла. Әммә 40 йылдан һуң ул емерелеү хәленә етә, шулай уҡ кинотеатр ҙа үҙенең еңел булмаған осорон кисерә. Видео эраһы халыҡта кино сәнғәтенә һөйөүҙе һыуындыра, улар кинотеатрға йөрөмәй башлай, ә бинала магазиндар, дарыухана, мәғлүмәт бюроһы, туҡланыу нөктәһе асыла. 10 йылдан һуң ғына кинотеатр ғәҙәти эш ритмына күсә, әммә скульптураны һаҡлап ҡалыу мөмкин булмай, ул 2000 йылда алына. Ниһайәт, быйыл Калинин районы хакимиәте "Кино планетаһы" компанияһы менән берлектә һәйкәлде тергеҙергә ҡарар итә. Урынына урау юлдар аша әйләнеп ҡайтҡан яңыртылған скульптура композицияһы 28 октябрҙә тантаналы асылды.

✓ Өфө иҫке һәм авария хәлендәге йорттарҙа йәшәүселәрҙе күсереү программаһын тормошҡа ашырыу буйынса лидерҙар рәтендә. Был эшмәкәрлек махсус программаға ярашлы алып барыла һәм әлеге көнгә 330 йорттан 12381 граждан яңы фатирҙарға күсерелгән. Федераль ҡануниәттә билдәләнеүенсә, торлаҡ "квадратҡа квадрат" принцибы буйынса бирелә, йәғни элек граждандар нисә квадрат метр майҙанды биләгән, яңы йортта ла шундай уҡ майҙанға күсенә. Ҡануниәттә яҙылған талаптарҙы боҙоу - ҙурыраҡ йәки бәләкәйерәк майҙанлы фатирҙар биреү тотош программаны тормошҡа ашырыуҙы хәүеф аҫтына ҡуя. Үкенескә күрә, граждандарҙың барыһы ла закон талаптарын белмәй һәм быға тиклем 10 квадрат метрҙа йәшәп, ике бүлмәле фатир алырға иҫәп тотоусылар ҙа осрай. Шулай уҡ ҡаланың үҙәгендә йәшәп, яңы биҫтәләрҙә төҙөлгән йорттарға күсенергә теләмәүселәр ҙә бар. Ә инде үҙәктә төҙөлөш алып барған ойошмалар фатирҙарҙы программа билдәләгән хаҡ буйынса һатырға теләмәй һ.б.Был программаны тормошҡа ашырыу 2018 йылдың 1 сентябрендә тулыһынса тамамланырға тейеш.

✓ Башҡортостандың 100 йыллығына "Өфө мираҫы" тип аталған мәҙәни-тарихи этнокомплекс барлыҡҡа килеүе ихтимал. Йәмәғәтселәр уны Октябрь революцияһы урамында һаҡланып ҡалған тарихи төҙөлөш базаһында төҙергә тәҡдим итә. "Өфө мираҫы" проектының нигеҙендә - өс туристик маршрут: беренсеһе Дуҫлыҡ монументы - Октябрь революцияһы урамы - Ҡунаҡһарай - Коммунистик урамы; икенсеһе: Пушкин урамы - Яңы күпер урамы - Ленин урамы - К. Маркс урамы - Гоголь урамы; өсөнсөһө: Салауат урамы - Софья аллеяһы (Туҡай һәм Рәсүлев урамдары) - Совет урамы - Гоголь урамы. Проект инициаторҙары Аксаков паркында Йәйге театрҙы тергеҙергә кәрәк тип иҫәпләй. Тюлькиндың йортмузейында XX быуаттың икенсе яртыһындағы - XXI быуат башындағы башҡорт һынлы сәнғәт мәктәбенең музей-күргәҙмәләр залын асырға тәҡдим ителә. Бында шулай уҡ йәйәүлеләр зонаһын һәм велосипед юлдарын индереү күҙаллана. Тергеҙелгән биналарҙа музейҙар, милли ихаталар урынлаштырырға тәҡдим ителә. "Бында йыл дауамында байрамдар, фестивалдәр ойоштороға, ҡалаһын үҙенсәлекле тарихи мөхите һәм бөйөк яҡташтарыбыҙ, шәхестәребеҙ йәшәгән, ижад иткән урындар менән ҡыҙыҡһынған сит ил делегацияларын һәм ҡунаҡтарын саҡырырға мөмкин.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Склероз

❖ Өлкәнә барған һайын хәтер насараймаһын өсөн дөрөҫ туҡланырға кәрәк. Көн һайын ҡырғыстан ҡырылған кишергә йөҙөм йәки әстерхан сәтләүегe өҫтәп, ҡаймаҡ ҡушып ашарға. Көн һайын 200-300 грамм йөҙөм емеше йәки 100 грамм диңгеҙ кәбеҫтәһе, шулай уҡ һыуҙа бешкән картуф, ике аҙнаға бер һыуҙа бешкән һәм аҡ май өҫтәлгән кәбеҫтә ашағыҙ. Сәйгә бер семтем бөтнөк үләне өҫтәп ебәрегеҙ. Күк сәскәне сәйнәү ҙә склерозды туҡтата.

### Ашҡаҙан

❖ Ашҡаҙан ауыртҡанда йылы ғына мамыҡ шәлгә төрөнөп ятып тороғоҙ. Ауыртыу үтәсәк. Тигеҙ күләмдә аҡ сәскә, бөтнөк менән мелисса үләне алып, 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 10-15 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм эсергә. 10 минут дауамында һыуҙа бешерелгән һоло бутҡаһы ашарға кәрәк.

### Тоҙ ҡыуыу

❖ Эмаль һауытҡа 1 литр ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға, 6 ҡалаҡ аҡтамыр тамыры өҫтәргә, ҡапҡасын ябып, ярты сәғәт ҡайнаған һыуҙа торорға, 10 минут бүлмә температураһында төнәтергә, марля аша һөҙөргә, тәүге күләмгә еткергәнсе һыу өҫтәргә һәм ашарҙан 15 минут алда 100-әр грамм эсергә.

### Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы түбән булғанда ҡара сәй эсергә кәрәк. Кистән 10 грамм шинмәҫгөл үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, иртән ас ҡарынға һәм төшкө ашты ашарҙан 30 минут алда 30 мл эсергә. Дауаланыу курсы - 10 көн. Көн һайын төнәтмәнең яңыһын әҙерләргә.

### Мастит

❖ Мастит, мастопатияны дауалау өсөн ҙур булмаған кәбеҫтәне турап, уға 15 төшһөҙ ҡара емеш өҫтәргә, 150 мл һөт өҫтәп, ҡуйырғансы бешерергә. Бүлмә температураһына тиклем һыуынғас, марляға һалып, 4 сәғәткә шешкә һалып торорға. Икенсе көнөнә ошондай уҡ ваҡытҡа арыш ҡамыры һалырға. Ҡамыр ҡабарып сыҡҡас, уға ла туралған 10 ҡара емеш өҫтәргә онотмағыҙ. Ошо компрестарҙы ай дауамында ҡабатлағыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ Беҙҙең заман еңел түгел, балалар тормоштоң бөтә ауырлыҡтарын күреп-белеп, аңлап үҫә. Күптәр атай-әсәйенең хәлен, ни өсөн ғаиләләрендә теге йәки был уңайлыҡтар булмауын аңлай.



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

## ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Һөйәк һынғанда, быуын тайғанда ярҙамды быуын ултыртыусы күрһәткән. Һөйәк һынғанда уның остары мускулдар тартышыуҙан йыш ҡына күсә, зарарланған ағза ҡыҫҡара. Ярҙам күрһәткәндә һуҙып, һөйәк остарын бер-береһенә ҡайтарыу кәрәк була. Был ауыр эш. Уны башҡарыу өсөн һөйәк ултыртыусы ҡулдарын майлап йә һабынлап, зарарланған ағзаға йомшаҡ ҡына хәрәкәттәр менән массаж яһай. Һөҙөмтәлә, мускулдарҙың ҡыҫҡарыуы-тартышыуы арыу ғына кәмей, имгәнгән кеше лә тыныслана. Ошондай әҙерлек үткәс кенә дауалаусы еңелсә, ләкин ҡапыл тартып, һөйәк остарын бер-береһенә тоташтыра. Быуын ултыртыу тәртибе лә ошондай булған.

Малайҙарҙы сөннәткә биреү ҡулланылған. Был операцияны сөннәтселәр яһаған. Уны 1-3 йәшлек малайҙарға эшләгәндәр. Операция техникаһы бик ябай. Ҡаҫа осо бер аҙ һуҙылып, махсус ҡыҫҡыс менән ҡыҫылған. Шунан үткер ҡырыныу бәкеһе ярҙамында ҡаҫа осо киҫеп алынған. Барлыҡҡа килгән яраға һалам көлө йәки сөрөк онтағы һипкәндәр.

Сөйәлдән ҡотолоу өсөн, айға күрһәтеүҙән тыш, сөйәл төбөн бәйләү ҡулланылған. Һөҙөмтәлә бер нисә көндән ҡороған сөйәл өҙөлөп төшкән. Сөйәлдән уны көйҙөрөү юлы менән дә ҡотолғандар. Мәҫәлән, түбәндәге ысул билдәле: сөйәл өҫтөнән ҡан сыҡҡансы сыйғандар, шунан яндырылған шырпы башы менән өткәндәр.

Башҡорт халыҡ медицинаһында ҡан ағыҙыу дауаһы йыш ҡулланылған. Уның маҡсаты, йәнәһе, "боҙоҡ ҡандан" ҡотолоу булған. Ҡан ағыҙыр урын башта һабынлап йыуылған, унан ошо ергә күмгәк барлыҡҡа килгәнсе ҡан һурғыс банка (ғәҙәттә, ябай стакан) ҡуйылған. Аҙаҡтан махсус тишкес йәки ғәҙәттәге бәке менән тирене еңелсә йәрәхәтләгәндәр ҙә ҡанды ҡыҫып сығарғандар. Ҡан ағыҙыу өсөн тиреләге һөлөк һалдырыуҙан ҡалған тишектәрҙән дә файҙаланыу булған. Фән күҙлегенән ҡарағанда, халыҡ табибтарының ҡан ағыҙыуға булған ҡарашы менән килешеп булмай. Ҡан ағыҙыу боҙоҡ ҡандан ҡотолоу маҡсатында эшләнгән. Ә ҡандың боҙоҡлоғон үҙҙәренсә бик еңел билдәләгәндәр. Ҡандың төҫө ҡара икән, йәнәһе, ул - боҙоҡ. Был хата ҡараш, сөнки тире һәм тире аҫты туҡымаһы веноз (кислородҡа ярлы) ҡанға бай. Ә веноз ҡан ҡара төҫтә була. Тимәк, боҙоҡ ҡан ағыҙам тип, күп ҡан юғалтылыуы ла бар.

Шулай уҡ һәр ауылда бер нисә кендек инәһе лә булған. Уларҙы халыҡ, яҡты донъяға килеү бәхете биреүсе итеп, бик яҡын күреп ихтирам иткән. Бәпесләү өй шарттарында, ә ҡайһы бер урындарҙа мунсала үткән. Бала табыу бинаһына ҡарата төп талап - уның йылы булыуы. Бәпесләү алдынан бала табыусы ҡатын көс-хәл инһен өсөн һарыҡ һурпаһын ҡоротлап эскән. Бәпеслəгән көндә йәки уның иртәгеһенә бала тапҡан ҡатынға йылымса мунсала йыуынырға рөхсәт ителгән. Йыуынырға кендек инәй ярҙамлашҡан. Мунса ингәндә, бушанған ҡатындың тәне йомшарып китә, кендек инәй уға массаж яһай. Ҡайһы бер урындарҙа ошондай йылы мунсалағы массаж 4-5 көн буйы ҡабатланған. Халыҡ медицинаһы белгестәре был сараны бик файҙалы тип иҫәпләй. Сөнки, "ҡан ойоу" һымаҡ күренештәр бөтөрөлә, ҡан йөрөшө, матдәләр алмашыныу процестары яҡшыра. Хәҙерге медицина фәне күрһәтеүенсә, бала тапҡан ҡатындарҙа аяҡтарҙағы вена тамырҙарының төйөрләнеп киңәйеүе, геморрой ауырыуы йыш күҙәтелә. Бәлки, ошондай массаждар яһағанда, был ҡатмарлашыуҙар һирәгәйер ине.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ

# ТУҒАН ТЕЛ МӨХИТЕНДӘ УҠЫУ...

## тәртипле лә итә беҙҙе

**Йәмғиәттең киләсәген мәктәптәрҙә уҡыған балаларға ҡарап төҫмөрләргә мөмкин, сөнки белем усағы барыбер ҙә төп тәрбиә сығанағы булып тора. Өфө ҡалаһының Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһы уҡыусылары Алһыу Хәкимова, Ҡарлуғас Исмәғилева, Данил Камалов һәм Наҙгөл Заһитова менән әңгәмәләшкәндә лә беҙ белем усағының ролен генә түгел, киләсәгебеҙҙе лә күҙалларға тырыштыҡ.**



**➔ Һеҙ уҡыған белем усағына ҡасан нигеҙ һалынған икәнен һәр берегеҙ яҡшы беләлер, шулаймы?**

**Ҡарлуғас:** З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһы 1996 йылда асылған һәм быйыл ул 20 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Беҙҙең гимназия республиканың үҙаллылыҡ емеше. Баш ҡалала йәшәүселәр балаларын туған башҡорт телендә уҡыта алһын өсөн асылған ул. Гимназияла әле Инорс биҫтәһендә йәшәүсе балалар белем ала, бөтәбеҙ ҙә башҡорт телен ихлас өйрәнәбеҙ.

**Алһыу:** Атай-әсәйем беренсе синыфтан алып мине ошо гимназияға уҡырға биреүенә бик шатмын, сөнки бында уҡытыусылар бик яҡшы, туған телемдә аралашыу мөмкинлеге бар. Башҡортостанда йәшәгәс, башҡорт телен, тарихты, йолаларҙы белергә тейешбеҙ. Әгәр ҙә беҙ туған телебеҙҙе онотһаҡ, республикабыҙ ҙа булмаҫ ине.

**Данил:** Эйе шул, мин ҡыҙҙар менән тулыһынса килешәм. Башҡорт кешеһенә башҡорт телен белеү мотлаҡ, беҙгә был турала уҡытыусылар иҫкә төшөрөп кенә тора. Бынан тыш, туған телеңде белһәң, башҡа сит телдәрҙе өйрәнеүе еңел, тиҙәр бит. Беҙ башҡорт һәм рус теленән тыш, икенсе синыфтан алып инглиз телен дә өйрәнәбеҙ.

**Наҙгөл:** Гимназияға 2004 йылда ЮНЕСКО ассоциацияланған мәктәбе статусы бирелгән. Шуға ла беҙҙә төрлө милләт вәкилдәре ҡатнашлығында мәҙәни саралар, ҡыҙыҡлы осрашыуҙар, ярыштар үтеп тора.

**➔ Гимназияның үҙендә үткәрелгән ниндәй матур саралар йолаға әйләнеп киткән?**

**Ҡарлуғас:** Гимназия яҙыусы Зәйнәб Биишеваның исемен йөрөтә һәм йыл да уның ижадына арналған конференция үткәрелә. Унда беҙ жюри иғтибарына әҙибәнең әҫәрҙәре буйынса доклад, презентация, анализдар тәҡдим итәбеҙ. Был бөтә республика кимәлендә үткәрелгән конференция, шуға бүтән башҡорт гимназия, лицейҙарынан да уҡыусылар килә.

**Алһыу:** Мин унда йыл да ҡатнашам, был конференция уҡыусылар Зәйнәб Биишеваның ижадын өйрәнһен, уның тормошсан әҫәрҙәренән фәһем алһын өсөн үткәрелә. Яҙыусының "Далала таң" тигән әҫәре буйынса фәнни эш башҡарғайным, унда ситтә белем алып, кире ауылына эшкә ҡайтыусы ике йәш кеше тураһында һүҙ бара. Ә бөгөн күптәр ҡалаларҙа ҡалырға теләй, ауыр ер эшен башҡарғыһы килмәй һәм ундай һөнәрҙәр һайламаҫҡа тырыша. Зәйнәб Биишева, үҙең тыуып үҫкән ергә файҙа килтерергә кәрәк, тигән фекерҙе әйтергә теләй, тип уйлайым.

**Данил:** Гимназияла ойошторолған бөтә саралар башҡорт телендә үткәрелә, шуға беҙгә бер-беребеҙ менән туған телдә һөйләшергә сәбәптәр күп. Йолаға әйләнеп киткән сараларҙың береһе - "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар бәйгеһе, тиһәк тә була. Гимназияның "Ығы-зығы" КВН-командаһы йыл да ошо бәйгелә ҡатнаша.

**Наҙгөл:** "Һаумы, һаумы, Әкиәт!" ҡала конкурсы ла башланғыс синыф уҡыусылары өсөн көтөп алынған сара. Мин балалар баҡсаһында йөрөгән саҡта ла унда ҡатнаша торғайным. Хәҙер гимназия эргәһендә лә балалар баҡсаһы бар. Унда тәрбиәләнгән балаларҙы һуңынан беҙгә уҡырға алалар.

**➔ Гимназияла уҡыусының һәләттәрен үҫтереү өсөн ниндәй түңәрәктәр эшләй?**

**Ҡарлуғас:** Башланғыс синыф уҡыусылары өсөн шахмат түңәрәге бар. "Байрам" бейеү ансамблендә һәләтле ҡыҙҙар-егеттәр башҡорт бейеүҙәрен өйрәнәбеҙ.

**Алһыу:** Ижади балалар өсөн гимназияла былтыр журналистика буйынса түңәрәк эшләгәйне. Унда беҙ журналист һөнәренең нескәлектәренә төшөндөк, мәҡәлә яҙырға өйрәндек. Хәҙер гимназияның "Киләсәк" тигән айлыҡ гәзитен әҙерләгәндә шул тәжрибәне ҡулланабыҙ.

**Данил:** Беренсе синыфтан алып Айрат Ҡарасов етәкселегендәге ҡурай түңәрәгенә, һуңғы өс йыл баян түңәрәгенә йөрөйөм. Гимназияла ғына түгел, Орджоникидзе районында үткәрелгән төрлө сараларҙа ла сығыш яһайбыҙ. Тағы ла быйыл гимназия уҡыусыларына водителлеккә уҡырға мөмкинлек асылды. Өс ай белем алып, 18 йәш тулғас, имтихан тапшырырға була.

**Наҙгөл:** Төрлө спорт түңәрәктәре эшләй. Мәҫәлән, еңел атлетика, гимнастика, ушу менән шөғөлләнергә мөмкин.

**➔ З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһында яҡшы белем биреүҙәре, балаларҙың төрлө һәләттәрен асырға ярҙам итеүҙәре тураһында белдек. Ә бына тәрбиә, тәртип тәңгәлендә хәлдәр нисек?**

**Наҙгөл:** Беҙҙең синыфта малайҙар ҡайһы берҙә үсекләшеп, һүҙгә килешеп китә. Шуға ла уҡытыусылар һәр ваҡыт "Нимә яҡшы?" һәм "Нимә яман?" тигән һорауҙар буйынса әңгәмә ойоштора. Әммә, минеңсә, йәмғиәт ниндәй, балалар ҙа шундай булып үҫә. Гимназияла ғына тәрбиәгә, тәртипкә өйрәтеп бөтөп булмайҙыр ул.

**Алһыу:** Барыһы ла ата-әсәнән тора. Ғаиләләге мөхиткә, яҡын кешеләренең балаға мөнәсәбәтенә ҡарап, кешенең тәртибе билдәләнә. Әгәр ҙә ата-әсәһе балаһын йылы һүҙ әйтмәй, яратмайынса үҫтерһә, ул бала донъяның матурлығын күрә белмәйәсәк. Ә бына беҙҙең гимназия уҡыусылары башҡорт мөхитендә уҡый, тәрбиәләнә һәм уларҙың кемдәренең өйөндә лә шундай мөхит тыуҙырылған - улар күпкә тәртипле. Шуға бала туған телендә һөйләшеп, халҡының иң яҡшы сифаттарын һеңдереп үҫергә тейеш.

**Ҡарлуғас:** Беҙҙең заман еңел түгел, балалар тормоштоң бөтә ауырлыҡтарын күреп-белеп, аңлап үҫә. Күптәр атай-әсәйенең хәлен, ни өсөн ғаиләләрендә теге йәки был уңайлыҡтар булмауын аңлай. Әммә күптәрҙең эргәһендә өлгө күрһәтерлек кешеләр юҡ. Мәҫәлән, Стив Джобс кеүек булырға теләк тыуһын өсөн, уның кеүек уңышҡа өлгәшкән бер кеше менән булһа ла танышырға кәрәк.

**Данил:** Әйткәндәй, Стив Джобс кеүек уңышҡа өлгәшеү тураһында һөйләгәндә, ул уҡыуын да ташлаған, яҡшы өлгәшмәгән, юғары уҡыу йортон тамамламаған, эшкә төшөп, оҙаҡ эшләмәгән, тиҙәр. Йәнәһе, бөтәһе кеүек булмаған, үҙ хыялын тормошҡа ашырырға теләгән. Әммә Стив Джобс уҡыуын ташлаған саҡта уҡ үҙенең киләсәген күҙ алдына килтерә алған, күңеленә яҡкан шөғөлөн тапҡан, аныҡ маҡсаттары булған. Мәҫәлән, үҙенә кәрәк булғас, ул каллиграфия курстарына йөрөгән. Әгәр ҙә киләсәктә кем булырын белмәһә, ғүмер буйы төрлө эштәрҙе башлап, тамамламайынса ҡалдырған булыр ине. Шуға, кешенең шәхесенә тәүҙә атай-әсәйҙең тәрбиәһе йоғонто яһай, һуңынан барыһы ла үҙенән генә тора. Уҡытыусыларыбыҙ беҙгә был турала ла һөйләй, синыф сәғәттәрендә төрлө темаларға фекер алышабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Билдәле тарихсы Василий Ключевскийҙың шундай һүҙҙәре бар: "Уҡытыусыларға һүҙ аҡылын йоҡлатыу өсөн түгел, сит кешенекен уятыу өсөн бирелгән", - тигән ул. Уҡытыусыларҙың хеҙмәтен баһалауҙа ошо һүҙҙәргә ҙур әһәмиәт бирелергә тейештер ул, моғайын. Бөгөн балаларыбыҙ башҡорт мөхитендә уҡырға үҙҙәре теләк белдерә, туған телен тәрәндән өйрәнеү, башҡорт рухында тәрбиәләнеүҙең мөһимлеген аңлай, ниндәйҙер үҙгәрештәрҙе күреп борсола икән, тимәк, педагогтар - һүҙ ҡеүәтенең тәғәйенләнешен, ә халыҡ белемдең дә икмәк кеүек ҡәҙерле булыуын яҡшы белә. Өфө ҡалаһының Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһы быға асыҡ миҫал.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

✓ ***Башҡа цивилизацияларға ҡарағанда Солоҡсолар иле ныҒыраҡ үҫешкән, боронғо башҡорт ҡәбиләләре территорияһында табылған Филиппов кургандарының ҡомартҡылары шул хаҡта һөйләй.***



*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ*



# ХӘЛИМ ӘМИРОВ

1919 йылдың июнь уртаһында башҡорт ғәскәрҙәре генерал Деникиндың армияһы менән ҡаты алышҡа инә. Комиссар Әмиров полк командирҙарын йыйып, кәңәшмә үткәрә һәм 1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры Сөләймән Ишмырҙинды бригада командиры итеп һайлайҙар. Ҡыҙылдарҙың 14-се армияһының тулыһынса тарҡалып, тәртипһеҙ рәүештә сигенеүе, улар менән идара иткән Харьковтың оборона Советының аҡтарға һатылыуы арҡаһында Башҡорт бригадаһына ауыр юғалтыуҙар кисерергә тура килә. Фронт тотҡан күрше ҡыҙыл частарҙың сигенеүе арҡаһында башҡорт ғәс-кәрҙәре аҡтарҙың ҡамауында ҡала. Унының өҫтәүенә, Харьковтың аҡтар ҡулына күсеүендә башҡорттарҙы ғәйепләп, Оборона Советы Сумы ҡалаһында Башҡорт бригадаһының штабын, шул иҫәптән Х. Әмировты ҡулға ала. Былдай хәл башҡорт ғәскәрҙәрендә ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Башҡорт һалдаттары ҡулға ҡорал алып, командирҙарын ҡотҡарырға әҙер булыуын белдерә. Быны күреп, Оборона Советы башҡорт командирҙарын ирекке сығарырға мәжбүр була. *"Мы с боем и дорогой, ловя дезертиров, начали пребывать на Сумы. По прибытию первого эшелона - Штаба Башкирской бригады приказам члена Совета Обороны Зайцева, который так позорно раньше всех бежал из Харькова, Сумский отряд во главе с милицией и чрезвычайкой арестовал и разоружил весь Штаб Бригады во главе меня и командиров. Нас представили в округ Военком. Во время ареста наш эшелон подвергался обстрелу, хотя мы не сопротивлялись, потом нас освободили и за свои незаконные действия извинились. Во время ареста оставшиеся караул в нашем эшелоне, назначенный Чрезвычайкой произвел полную очистку вагонов от собственных вещей служащих Штаба Бригады. Пропали: масса денег, вооружения, белья, одежды и пр. Это явление на наши части, которые кровью, честно защищали свободу пролетариата Украины, сильно повлияло и нам с трудом удалось их успокоить. Нами Совету Обороны сданы более 10-ти эшелонов с ценностями народного достояния, которые нами были задержаны, так как они следовали без хозяина. Кроме того, проезжало много вагонов с деньгами тоже без хозяина. При таких условиях работать и оперировать на Южном фронте не возможно. Просим сейчас же принять меры к переброске нас на Восточный фронт"*, - тип яҙа бригада командиры С. Ишмырҙин менән комиссар Х. Әмиров республиканың хәрби комиссары Вәлидигә.

1919 йылдың июль башында Көньяҡ фронтҡа хәрби комиссар Зәки Вәлиди килә. Бында яңы килгән һалдаттар командирҙар менән тулыландырылып, Башҡорт бригадаһы Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. Ул дивизияның сәйәси комиссары итеп Нуриәғзәм Таһировты тәғәйенләй. Ә Хәлим Әмиров Саранскиға, Башревком ҡарамағына ҡайтарыла. Әммә уға хәрби эштәрҙән оҙаҡ айырылырға тура килмәй.

1919 йылдың сентябрендә Петроград фронтындағы Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәренең хәле мөшкөлләнә. Юденич армияһы ҡыҙылдарҙы борҡотоп, революцияның бишеге - Петроград ҡалаһына яҡынлаша. Ҡыҙыл Армияға ярҙамға тағы ла һуғышсан, дисциплиналы башҡорт ғәскәрҙәре кәрәк булып сыға. Ленин менән Троцкий бөтә башҡорт ғәскәрҙәрен тиҙ арала Петроградҡа ебәрергә тигән фарман бирә. *"Троцкий Бәләбәйҙә ойошторолған өсөнсө һәм дүртенсе йәйәүле, өсөнсө һыбайлы полктарҙы Петроградҡа һөжүм итеүсе генерал Юденичҡа ҡаршы ебәреүҙе талап итә. Мин ул ғәскәрҙе өйрәтеү, бөтә кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү эштәренең әле тамамланмауын әйтеп, хәҙергә ике батальонды бер-ике аҙна эсендә әҙерләргә полковник Әхмәровҡа әмер бирергә вәғәҙә иттем. Бәләбәйҙәге полковникты телеграфҡа саҡыртып, хәлде аңлаттым. Ул хәҙергә хатта ике батальондың да әҙер түгеллеген белдерҙе. Мин быны иртәнсәк Троцкийға еткерҙем. Был иһә башҡорт ғәскәрҙәренең Юденичҡа ҡаршы һуғышта ҡатнашыуының башланғысы ине"*, - тип яҙа Әхмәтзәки Вәлиди.

Бәләбәй ҡалаһында торған Айырым Башҡорт бригадаһы частары һәм тағы бер кавалерия полкы, әҙерлеге булмауға ҡарамаҫтан, Петроградҡа оҙатыла. Шулай уҡ бында Көньяҡ фронттан Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм уның 1-се, 2-се полктары штабтары килә. Башҡортостандан килгән яңы һалдаттар иҫәбенә бригада һәм дивизия частары ойошторолорға тейеш була. Был мөһим эшкә етәкселек итеү бурысы тағын да Хәлим Әмировҡа тапшырыла. Ул Башҡорт республикаһының башҡорт ғәскәрҙәрендәге махсус вәкәләтле вәкиле (особоуполномоченный) сифатында киң хоҡуҡтар менән Петроградҡа ебәрелә.

10 мендән ашыу яугирҙан торған Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөнә идара итеү еңелдән булмай. Петроградҡа килеү менән Х. Әмиров, тәү сиратта, башҡорт ғәскәрҙәрендәге сәйәси комиссарҙар составына иғтибарҙы йүнәлтә. Ғәскәрҙәрҙе Башҡорт хөкүмәтенең сәйәсәтен алып барырҙай кадрҙар менән тулыландырыу кәрәклеген аңлай. Сөнки башҡорт милләтенән булмаған комиссарҙар ғәскәрҙәргә зыян ғына килтерә, бигерәк тә татар эшмәкәрҙәре. Улар Башҡортостан автономияһына ҡаршы агитация алып бара. Мәҫәлән, Башревком рәйесе Харис Йомағолов Башҡорт дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһировҡа былай, тип яҙа: *"Сообщи всем-всем красноармейцам-башкирам! Пусть не поддаются провокации! По некоторым сведениям наших красноармейцев в Белебее настраивали против нас т.е. Ревкома и Б.С.Р. и против Советов, так прими меры чтобы рассеять лживые, провокационные слухи красноармейцев".*

Шуға күрә лә Хәлим Әмиров башҡорт ғәскәрҙәрендәге сит милләт комиссарҙары урынына башҡорттарҙы тәғәйенләргә, тигән мәсьәләне алға һөрә. Бының өсөн ул Мәскәүҙә Свердлов исемендәге Коммунистик университетта уҡыған башҡорт курсанттарын Петроградҡа ебәреүҙе һорай. Ошо айҡанлы Мәскәүҙә, ВЦИК янындағы Башҡорт республикаһы вәкиле Әбдрәшит Бикбауов 1919 йылдың 29 октябрендә Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссариатына былай тип хәбәр итә: *"Настоящим сообщаю требование особоуполномоченного по делам башкирских частей в Петрограде т. Амирова о замене во вверенных ему башкирских частях ответственных работников небашкир башкирами-курсантами, необходимой для создания могущественной башкирской армии и для ее воспитания в зависимости (с учетом) бытовых и исторических особенностей нашего народа, а также потдверждаю его настойчивую просьбу об откомандировании в Петроград московских курсантов тт. Магасумова, Баталова, Абсалямова, Ишкаева и Дюкасова на полковые комиссарские должности и еще десять человек на менее ответственные должности..."*. Ә. Бикбауов та Хәлим Әмировтың фекерен ҡеүәтләй: *"Побывав в Петрограде, лично убедился, что удовлетворение просьбы Амирова крайне необходимо"*, - тип тамамлай ул үҙенең телеграммаһын.

Нуриәғзәм Таһиров һәм Хәлим Әмировтың тырышлығы менән Мәскәүҙә уҡып йөрөгән башҡорт эшмәкәрҙәре: Ғабдулла Ибраһимов - Башҡорт уҡсы бригадаһының комиссары, Һиҙиәт Сәғәҙиев - Башҡорт кавалерия дивизияһы сәйәси бүлеге мөдире итеп, Хәйҙәр Лотфуллин "Салауат" гәзитенә эшкә тәғәйенләнә.

**Шулай итеп, Хәлим Әмиров Петроградта ғәскәрҙәр араһында Башҡорт автономияһы етәкселегенең сәйәсәтен, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте мәнфәғәтен алға һөргән, пропагандалаған эшмәкәрҙәрҙең береһе була. Быны Башҡортостан Республикаһының йәмәғәт ойошмалары архивында бик ҡыҙыҡлы һәм ҡиммәтле документ - "Бәхет көнө" тип аталған йыйынтыҡ та раҫлай. "Бәхет көнө" йыйынтығы Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Советтар яғына сығыуына бер йыл тулыу айҡанлы 1920 йылдың февралендә Петроградта баҫыла. Унда Башҡорт автономияһы етәксеһе Әхмәтзәки Вәлидиҙең, Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары Ғабдулла Ибраһимов мәҡәләләре һәм Башревком вәкиле Хәлим Әмировтың "Башҡорт хәрәкәте" исемле доклады урын алған. Был доклады менән Әмиров Петроградта башҡорт ғәскәрҙәренең 1-се коммунистик конференцияһында сығыш яһай. Юғары трибунаға сығып, Хәлим Әмиров Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштең тарихын бәйән итә, уның маҡсаттарын һалдаттарға еткерә.**

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**
**(Аҙағы. Башы 43-сө һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



Йәдкәр БӘШИРОВ

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Б.э.т. V быуатҡа ҡараған тарихи сығанаҡтар ғына Көньяҡ Уралда йәшәүсе боронғо ҡәбиләләр хаҡында аныҡ мәғлүмәт еткерә. Тик уларҙа башҡорт халҡының ата-бабалары булған даик, дахо, исседон, аримас, агриппей, иирк, мәсәғүт ҡәбиләләре телгә алына. Ҡәбиләләр быуаттар буйына аралашып йәшәгән. Обь буйы тураһындағы мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп В.Н. Чернецов иртә быуат дәүерендә Урал аръяғы һәм Көнбайыш Себер ерҙәрендә уғыр (башҡорт) ҡәбиләләре йәшәүе хаҡында яҙа ( 160, 118-се бит). Мәҫәлән, автор Обь буйы уғырҙарының мифологияһына мөрәжәғәт итеп, ханттар менән мансиларҙың дини ышаныуҙары Обь уғырҙарын барлыҡҡа килтереүсе ике компоненттың ҡушылыуынан килеп сыҡҡан тип иҫәпләй (160, 124-се бит). Бигерәк тә халыҡтарҙың бөйөк күсенеүе дәүерендәге ҡатмарлы тарих халыҡтарҙың физик тибында, телендә һәм көнкүрешендә эҙһеҙ үтмәй, әлбиттә (147, 304-се бит). Ҡәбиләләрҙең туҡтауһыҙ һәм оҙайлы күсенеүе төрлө халыҡтарҙың барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ иткән.

Тарихсыларҙың мәғлүмәттәре буйынса, б.э.т. VIII быуатта Волга-Урал төбәгендә фин-уғыр ҡәбиләләре йәшәгән. Улар был ерҙәрҙә күпмелер йәшәгәндән һуң яйлап башҡа ерҙәргә күсенгән. Волга-Урал территорияһының төркиләшеүе б.э.т. VI- IV быуатта уҡ скифтар дәүерендә башланған. М.З. Зәкиев билдәләүенсә, Уралдың көнбайышында фин-уғыр халыҡтары менән төрки телле халыҡтарҙың тығыҙ аралашыуы башланған ( 195, 305-се бит).

Р. Кузеевтың: "Этнографик төркөмдәр этник территориялар нигеҙендә барлыҡҡа килгән һәм этностың айырылғыһыҙ бер өлөшө булараҡ нығыраҡ ойошҡан берәмеккә ҡушылған", - тип яҙыуы Урал төбәгенең аҫаба халҡының боронғо дәүерҙән башлап нисек формалашыуын күҙалларға мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, солоҡсолар яртылаш күсмә тормош менән йәшәгән саҡта ла солоҡтарын ташлап ҡалдырмаған, был шөғөл эстафетаһын үҙенең вариҫтарына күсергән. Башҡа цивилизацияларға ҡарағанда Солоҡсолар иле нығыраҡ үҫешкән, боронғо башҡорт ҡәбиләләре территорияһында табылған Филиппов кургандарының ҡомартҡылары шул хаҡта һөйләй. Хәҙерге көнгә тиклем ошо шөғөлдөң продукцияһы башҡорт халҡын бар донъяға данлай. Уралда йәшәүсе боронғо халыҡ тураһында алыҫ тарафтарҙа ла белгәндәр.

Һуңғараҡ, урта быуаттарҙа, III быуаттың икенсе яртыһында герман ҡәбиләләренең баҫып инеүе һөҙөмтәһендә һуңғы скифтарҙың дәүләте юҡҡа сыға. Этник берәмек булараҡ, скифтар үҙҙәре лә йәшәүҙән туҡтай. Улар урынына V быуаттың икенсе яртыһында Һундар кенәзлеге барлыҡҡа килә. Был кенәзлекте VI быуат башында Византия яулай. Һөҙөмтәлә быуат аҙағында Төрөк Ҡағанаты хакимлығы урынлаша, уны һуңынан Хазар Ҡағанаты алмаштыра. Был территорияла йәшәүсе кеше һанының күплеге хаҡында ырыу-ҡәбиләләрҙең күп төрлөлөгөнә ҡарап та фекер йөрөтә алабыҙ. Былар тамғаларҙа сағылыш таба. Донъяға билдәле булған 8000 тамғаның 7000 самаһы Волга-Урал буйы ырыу-ҡәбиләләренеке.

**(Дауамы бар).**

# ҺӘР ИР-ЕГЕТ

## эйәрле-йүгәнле

**Кем ул заман башҡорто? Ул үҙ милләте өсөн ниндәйҙер эштәр атҡарған, уның өсөн йән атҡан шәхес. Ниндәй өлкәлә һәм ниндәй күләмдә булһа ла. Башҡорт йәмғиәте, халҡы унан мәрхәмәт күрә икән, тимәк, ул - үҙ милләтенең бәхете, насибы. Был һүҙҙәрҙе беҙ сираттағы ҡунағыбыҙ Юлай ҒӘЛИУЛЛИНға ла арнай алабыҙ. Башҡорт милли ғәскәрен реконструкциялау эше менән мәшғүл булған "Любизар" беренсе башҡорт атлы полкы идараһы рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы һәм унан башҡа ла бик күп матур башланғыстарҙы әйҙәп, ойоштороп йөрөүсе был ир-уҙаман менән һөйләшеп-аралашыу үҙе бер тәрбиә мәктәбе булды. Йәғни, ирҙәр тәрбиә мәктәбе.**

**▸ Юлай Рәфҡәт улы, быйыл йәйгеһен беренсе тапҡыр республиканың Мәҙәниәт министрлығы, Халыҡ ижады үҙәге һәм һеҙҙең "Любизар" беренсе башҡорт атлы полкы ойошторған "Мәргән уҡсы" беренсе республика фестивале гөрләп үтте. Уҡ-һаҙаҡтың башҡорттоң ғына түгел, бөтә донъя халыҡтарының да тәү ҡоралы икәнен беләбеҙ. Ни өсөн фестиваль тап ошо уҡ атыуға арналды? Ни өсөн, мәҫәлән, атта сабыу йә башҡа осталыҡҡа түгел?**

- Уҡ-һаҙаҡтың кешенең тәү ҡоралдарының береһе булыуын үҙегеҙ ҙә әйтеп киттегеҙ. Тимер ҡоралдарға тиклем, атҡа тиклем бик күпкә алда кеше ҡулында уҡ-ян булған инде. Ул башта һунар итеү, аҙыҡ табыу маҡсатында булдырылһа, тора-бара дошмандарҙан һаҡланыу сараһы итеп тә ҡулланылғандыр. Ә беҙҙең халыҡ өсөн иһә уҡ атыу, көрәш, атта сабыу - ул сөннәт.

Малайзия, Япония, Ҡытай, Иран, Венгрия, Польша, Англия, Төркиә, Литва, Бразилия һәм башҡа илдәрҙә уҡ атыу шөғөлө бик яҡшы үҫешкән. Донъяла глобалләшеү бара һәм шунан һаҡланып, күп халыҡтар үҙҙәренең тарихи тамырҙарына ҡайтырға, юҡҡа сыҡмаҫҡа тырышып ята. Милли кейемдәрен, аштарын, йолаларын тергеҙә. Ә беҙҙә был һөнәргә, нисектер, балалар уйыны итеп кенә ҡарайҙар һаман.

Йәй көнө булып үткән "Мәргән уҡсы" фестивалендә ир-егеттәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, йәштәр ҙә ҡатнашты. Йәғни, был шөғөл йәшкә, енескә, физик өҫтөнлөктәргә лә бүленмәй. Уҡ атыуҙы мин спорт төрө итеп ҡарамайым, ә һәр кем белергә тейеш булған шөғөл итеп ҡабул итәм. Күптән түгел уҙғарылған башҡорт милли спорт уйындарында уҡ атыу беренсе тапҡыр тамашасы алдына сығарылды һәм атып ҡарарға теләгәндәр сиратҡа теҙелде. Был беҙҙең ҡанда, анда бар. Юҡҡамы ни, бала саҡта һәр ир бала уҡ-ян һап уйнай. Беҙгә хәҙер бары быны иҫкә төшөрөргә һәм үҫтерергә генә ҡала.

**▸ Бер заман "Төньяҡ амурҙары" атамаһында булып, хәҙер инде "Любизар" беренсе башҡорт атлы полкын булдырыусылар һеҙ. Тәүге тапҡыр "Башҡорт атлы ғәскәрен реконструкциялау" тигән аңлатманы ишеткәс, бер килке ишетелгәнде һеҙҙереп уйлаһын торҙом әле. Гәзит уҡыусыларҙың да тәү тәьҫораты шулай буласаҡ. Сөнки был беҙҙең өсөн яңы, ят күренеш. Атлы ғәскәрҙе реконструкциялау нисек була? Был эштең маҡсаты нимәлә?**

- Реконструкциялау, тимәк, башҡорт милли атлы ғәскәренең яугирын, уның кейемдәрен, ҡоралын һәм, әлбиттә, шундай уҡ йыһазлы атын һынландырыу. Ул яугирҙар белгәнде йәки белергә тейеш булғанды өйрәнеү, шул замандағы һуғыш алымдарын үҙләштереү, хәрби хәрәкәттәр, ғәскәр характерындағы үҙенсәлектәрҙе тикшереү, төшөнөү. Беҙ был эштәрҙе үҙебеҙ өсөн генә түгел, ә милләтте, уның рухын, сәм-ҡомарын уятыу өсөн эшләйбеҙ. Маҡсаты ла милли үҙаңыбыҙҙы, ир-егеттәребеҙҙә яугир, ил, ер һаҡсыһы булырҙай илһөйәрлек тойғоларын ҡуҙғытып ебәреүгә ҡайтып ҡала.

Бынан ун биш йыл элек Бородино һуғышын реконструкциялау сараһына "Төньяҡ амурҙары" булараҡ ҡатнашырға барһаҡ, ни күрәбеҙ - унда беҙҙең урында ҡаҙаҡтар йөрөй! Төньяҡ амурҙары булып! Шунан асыҡлауға күстек: Бородино яуында ҡаҙаҡтар ҡатнашҡанмы - юҡ, "Төньяҡ амурҙары" тигән исемдәре бармы - юҡ. Улайһа, ҡайҙан килгән уларға былдай уй? Бәктиһән, замана тарихсыларының береһе француздар тарафынан теркәлгән башҡорт исемдәрен үҙенсә тәржемә итеп, ул яуҙарҙа ҡаҙаҡтар йөрөгән, тигән "асыш" яһаған һәм был яңылыҡты күтәреп алыусылары табылған да. Ошо сарала ҡатнашыуға Ҡаҙағстан президенты аҡса бүлгән, баштан-аяҡ сынъяһау итеп кейендереп, аттарын КАМАЗ-дарға тейәп ебәргән хатта. Тора-бара уларҙың Парижда ла "Төньяҡ амурҙары" булып йөрөп ҡайтыуҙары хаҡында ишеттек. Был хәл беҙҙең сәмгә тейҙе. Ата-бабаларыбыҙ бөтөн Европаны инләп үтеп, сит тарафтарға башҡорт һөйкәтрен сәсеп ҡалдырып, ниндәй дан менән ҡайта! Ә беҙ шул исемде күтәрә лә алмайбыҙ. Бына бит, башҡалар беҙҙең йыйналмаған, тупланмаған, ҡәҙерһеҙ булған ҡомартҡыларыбыҙҙы тартып алырға, үҙләштерергә әҙер генә тора. Моңһоҙлоғобоҙҙан, иғтибарһыҙлығыбыҙҙан файҙаланып. Шунан һуң Францияға ла барҙыҡ, башҡорттар ҡатнашҡан күп кенә яуҙар реконструкцияһында ҡатнаштыҡ. Башта "монголдар" тип ҡаршы алһалар, торабара башҡортлоғобоҙҙо таныттыҡ. Арабыҙҙа милләтебеҙ тураһында мәғлүмәт биреүсе докладсылар ҙа, тарихсылар ҙа булды, улар барыһын да ентекле аңлатып, хәбәрҙар итеп йөрөнө. 2013 йылда Төркиәнең Истамбул ҡалаһында йәшәүсе дуҫыбыҙ Азат Ҡолдәүләтов үҙҙәрендә үткән оло сараға башҡорт уҡсылары булараҡ саҡырҙы. Унда ла шарт буйынса милли кейемдә, ағас уҡ-ян һәм башҡа йыһаздар менән барып, ҡатнашып, үҙебеҙҙе күрһәтеп, башҡаларҙы ҡарап ҡайттыҡ. Тағы ла Ҡытайҙа, Көньяҡ Кореяла ла булды егеттәребеҙ. Урын алмаған хәлдә лә, шундай халыҡ булыуыбыҙҙы танытып йөрөү заруур. "Йөрөгән таш шымара" тиҙәр бит.

Быларҙан тыш, тағы ла Башҡорт атлы кавалерия дивизияһын реконструкциялауҙа ҡатнашабыҙ. Ҡырмыҫҡалы районында, Шайморатов генералдың тыуған ерендә, 2011 йылдан алып йыл һайын тигәндәй саралар үтеп тора. 2013 йылда Украинаға "Днепр өсөн алыш" яу реконструкцияһына барырға тейеш инек, саҡырыу Германияныҡы менән бергә тура килеп, беҙ икенсеһен һайланыҡ.

**▸ Тағы ла ниндәй башҡорт яуҙары ҡыҙыҡһындыра һеҙҙе? Бөгөндән нимәгә тотонор инегеҙ?**

- Зәки Вәлиди ғәскәре хәрәкәттәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәй. Был минең шәхсән үҙем өсөн намыҫ эше. Уның тарихы шул уҡ минең затымдың тарихы ла. Оло ҡартатайым империалистик һуғышта кавалерист була, каптал хәрби чинында ҡайта. Унан Башҡорт хөкүмәтенең 2-се пехота полкына ҡушыла. Шул уҡ полкта улар өс бер туған була һәм ағайҙары батырҙарса һәләк булып ҡала. Бороңғо башҡорт йолаһы буйынса, оло ҡартатайыма тол ҡалған еңгәһенә өйләнергә тура килә. Ул саҡта уның мәрйә ҡатыны була, әммә мәрйә был йолаһа ҡабул итергә теләмәй, ҡайтып китә һәм оло ҡартатайыма еңгәһе тағы ла балалар, шул иҫәптән минең ҡартатайымды табып бирә. Ағаһының улдарын ул үҙенекеләй күреп үҫтерә, улар икеһе лә һуғышта ҡатнаша, гвардия сержанттары булып әйләнеп ҡайта. Абдулхай тигәне Дан ордендары кавалеры, бөгөн был Советтар Союзы Геройына тиңләнә.

Уйлап ҡараһаң, бөтөн шул тарихи ваҡиғалар булмаһа һәм шул хәлдәр кешеләр яҙмышына йөгонто яһамаһа, бөгөн мин дә булмаҫ инем. Улар барыһы ла минең донъяға килеүемә сәбәпсе булған һәм мин шул тарихты өйрәнеп белергә бурыслы.

Әле В. Путин Башҡортостан автономияһының 100 йыллығын билдәләү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы һәм ошоға бәйле ҙур саралар планлаштырылыр, тип уйлайым. Бары тик йыр-бейеүгә генә ҡоролмаһын ине был тарихи сара. Сөнки Башҡортостан автономияһының барлыҡҡа килеүе - ул һуғыш, алыштар, ғәскәрҙәр бәрелеше, ҡорбандар... Онотмаһаҡ ине шуны.

**▸ Һеҙҙең полк егеттәрен кинолар төшөрөүҙә лә ҡулланырға булалыр бит? Шундай саҡырыуҙар юҡмы? Ғөмүмән, кино төшөрөү мөмкинлеге булһа, кемдән йәки ниндәй тарихи ваҡиғанан башлар инегеҙ?**

- Киноға төшөргә саҡырыуҙар булып тора. "Етегән" фильмын төшөргәндә ҡатнаштыҡ. Әлбиттә, Салауат Юлаевҡа арналған кино төшөрөлһөн ине тип хыялланабыҙ. Был батырҙың исемен әйткәндә генә лә күңелендә рухы булған һәр башҡорттоң шундуҡ башы юғары күтәрелә, арҡаһы турая. Мин үҙем дә был шәхес тураһында күп уйланам. Уйлап ҡараһаң, ул Пугачевтың 86 полковнигының береһе булған, ә шуларҙан айырмалы "халыҡ батыры" исемен яулаған. Нисек улай булған һуң ул? 20 йәшлек кенә егет, беҙҙең ҡараштан малай бит инде, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 8 меңлек ғәскәр туплай алған. Ниндәй саҡырыу менән мөрәжәғәт итте икән уларға? Ниндәй мөғжизәле һүҙҙәр әйткән икән? Егерме йәшлек егет килеп: "Әйҙә, Юлай ағай, минең ғәскәргә, шунда барып һуғышып киләйек", - тиһә, мин дә, башҡа кеше лә, һис шикһеҙ, баш тартыр ине бит. Уйлап ҡараһаң, бығаса ла ихтилалдар яһап, күпме яҙалар күргән халыҡ, үҙҙәренең нимәгә барғанлығын аңламаған түгел бит - аңлаған. Һуғышта ла шәһит булыу мөмкинлектәрен белгән. Ә барыбер, гипнозланған кеүек, батырға эйәргән. Минең был хәлгә ошондай ғына яуабым бар: халыҡ батыры була торған кеше Күктәр тарафынан билдәләнә һәм уның әйткән һүҙе лә, ораны ла, башҡарған эштәре лә шулай яҙғанса ҡабул ителә. Улар бәйғәмбәрҙәр кеүек, бәлки, бәйғәмбәр ҙә булғандыр.

Тик бындай оло шәхес тураһында кино төшөрөү өсөн бик ҙур әҙерлек кәрәк. Әле ниндәйҙер эштәр алып барыла, тигән имеш-мимештәр бар, был мине һағайта ла. Ҡалай ҡылыс, дермантин кейем менән йыһазландырылырға тейеш түгел ғәскәр бында. Батырҙы яндырай яугир итеп кенә күрһәтмәһендәр ине. "Ах" итерлек, фәлсәфәле, эстәлекле, ғәскәр, массалар күренеше менән һөҙөмтәле кино ижад итерҙәй булмаһалар, башта икенсерәк варианттарҙа ҡул шымартһындар ине, тигән теләктәмен.

**▸ "Ҡалай ҡылыс, дермантин кейем" тигәндән, ғәскәрҙең бер яугирын баштан-аяҡ кейендереү яҡынса күпмегә төшә?**

- Осһоҙ түгел, осһоҙ түгел... Мәҫәлән, беҙҙәге йыла ағасынан эшләнгән яндың хаҡы һигеҙ меңдән башлана. Беҙ былай күп нәмәне үҙебеҙ эшләргә оҫтарҙыҡ инде хәҙер. Унан ары һанап киткәндә, ысын күндән яһалған ҡалъян, ҡорман, ҡаңғы, ҡаптырға, йәғни уҡ-һаҙаҡ һауыттары. Тағы ла ҡылыс, хәнйәр, һөңгө һ.б. Кейемдең йәйге-ҡышҡыһы. Сәхнәләге атлас-бәрхәт түгел, киндерҙән, ябай тупаҫ туҡымаларҙан яһалған күлдәк-ыштан, сәкмән, йөҡа кейеҙҙән башлыҡ, күн аяҡ кейемдәре. Быларҙан тыш, шулай уҡ күндән булған эйәр-йүгән. Ошолар барыһы, һәр хәлдә, 200 мең һумдан ашып китә (бында ат хаҡы инмәй).

"Ҡиммәт" тиергә ашыҡмай торорғоҙ. Бейеү ансамблдәренең бер бейеү өсөн тегелгән костюмдары 500-600-әр меңгә төшә. Йыл да бер төрлө булып үткән һабантуйҙар һәм башҡа мәжлестәргә күпме аҡса тотонола! Ә ғәскәр бер туплаһа, йыһазландырылһа, ул бөгөн модаға ингән "этно" сериялағында әллә күпме килем килтерер ине.

**▸ "Этно" тигән төшөнсә модаға инде бөгөн. Этнотөн, этноконцерт, этно ял урындары, этносәйәхәттәр, этнофестивалдәр ойоштороло. Һеҙ нисек аңлайһығыҙ ул "этно"-ны?**

-"Этно"ны сәхнә күргәҙмәһе менән генә сикләп ҡуйҙылар бөгөн. Йыр, бейеү, тирмәләр... Уйлап ҡараһаң, атта сабыу, "Ылаҡ", "Ҡыҙ ҡыуыу" уйындары шул уҡ этно. Һабантуй ҙа - этно. Тик уның этно үҙенсәлектәрен юғалтып ташланыҡ. Көрәште лә, ат сабышын да спортҡа ғына ҡайтарып ҡалдырҙыҡ. Тәүбашланғысында ғыса иткәндә - ул этно. Көрәшсеһендәр ауырлыҡ буйынса түгел, ә элеккесә - һуңғы батыр ҡалғансы. Таш күтәреүсе, уҡ атыусы, сәсәндәр, ҡурайсылар, йыр-бейеү башҡарыусылар халыҡ араһынан булһын. Мәҫәлән, бөгөнгө һабантуйҙарҙа нинә бағанаға мәнәләр, ул ҡайҙан килеп сыҡҡан? Борон мәргәнлектә ярышыусы һыбайлылар бағана осона

✓ ***Беҙҙең шөғөлдәр - улар көрәш, ҡул, ҡылыс һуғыштары, уҡ атыу. Ниңә беҙ бөгөн ҙур спортта юҡ? Сөнки сит шөғөлгә ынтылабыҙ. Үҙебеҙгә хасын онотҡанбыҙ. Әле бына егеттәребеҙ көрәш, ҡул һуғышы төрҙәрендә күренә башланы.***

төбәп атҡан һәм уҡтарҙы алып төшөүсе үрмәләүселәр булған. Бөгөн бағанаға бүләк алыр өсөн генә менәләр. Атһындар ине башта уҡ, уны алып төшөүсене бүләкләһендәр ине. Шул уҡ бәүелеп торған ауыш бүрәнәгә менеп, осонаса атларға тырышыу ҙа һыбайлының яу күнекмәһенән ҡалған. Сабып барған ат өҫтөндә һынды тота алыу оҫталығы бында.

Мин Белорет районының Ноҡат ауылында, әсәйемдең ата-әсәһе ҡарауында үҫтем. Урман эсендәге ауыл, олатайым ҡара таңдан тороп мылтыҡ аҫа ла, саңғыла урманға китә, ике-өс көндән генә атып алынған берәй кейек алып ҡайтып инә. Өләсәй уны мейес яғып, аш бешереп, мунса әҙерләп көтә. Бына был - этно.

# КҮҢЕЛЕНДӘ...

## ат ята

**Башҡорт атлы ғәскәрен реконструкциялауға боронғо милли башҡорт кейемен тергеҙеү ҙә инә бит инде. Бөгөн беҙ күреп өйрәнгән милли кейем менән боронғо ысынбарлыҡ араһында айырма бармы?**

- Оҡшашлыҡ бармы, тип һорарға кәрәктер, бәлки. Башҡорт кейеме Ф. Ғәскәров тарафынан сәхнә кейеме булараҡ бер аҙ үҙгәртелгән. Ул, мәҫәлән, төлкө башлыҡҡа ике төлкө ҡойроғо аҫып ҡуйған. Сәхнәнән ҡарағанда матур булып, ялпылдап йөрөһөн өсөндөр инде. Шулай уҡ кейемдәрҙәге тиреләр үтә сағыулығы, беҙгә хас булмаған төҫтәре, артыҡ биҙәүестәре менән бигүк төп нөсхәгә тап килеп бөтмәй. Быларҙың барыһын да Ф. Ғәскәров сәнғәт өсөн, матурлыҡ өсөн шулай ижад иткән, һәм был аңлашыла ла. Улар барыбер башҡорттоң милли кейеменә ишаралай, уның рухын сағылдыра. Ә ғәмәлдә ҡулланғанда, мәҫәлән, атта һыбай йөрөгәндә улар уңайһыҙлыҡ тыуҙыра.

Башҡорт кейемен реконструкциялау барышында беҙ, әлбиттә, тарихсылар, ошо өлкәне махсус өйрәнгән белгестәр менән кәңәшләштек, архив документтарын өйрәндек. Азат Ҡужин, мәҫәлән, төндәр буйы ултырып, милли кейем сығанаҡтарын эҙләне, тапты. Йәйен һәм ҡышын кейә торған, һыбайлыға уңайлы итеп яйлаштырылған, тик тәбиғи материалдарҙан ғына эшләнгән кейем-һалым, баш һәм аяҡ кейемдәре йүнләнек. Шулай уҡ башҡорт атлы ғәскәренең яу кейеме һәм ҡоралдарын да тегеп, йүнләп алдыҡ. Былар барыһы ла арзан булмаған, әммә рухи бөтөнлөк тойғоһо бирә торған бер ләззәт беҙҙең өсөн.

**Милли атлы ғәскәри тәрбиә, уҡ атыу, ҡылыс һуғышы кеүек шөғөлдәрҙе ниңә балаларға, йәғни малайҙарға ла өйрәтмәҫкә? Шундай мәктәп асыу идеяһы юҡмы? Минеңсә, теләүселәр күп булыр ине.**

- Әлбиттә, теләүселәр әле лә күп. Тик, үрҙә әйткәнемсә, баланы ундай шөғөлгә йөрөтөү өсөн башта ҡораллы итеү фарыз. Ә был аҡсаға ҡайтып ҡала. Ата-әсәләрҙең риза булыуы кәрәк. Шул уҡ ваҡытта, уйлап ҡараһаң, хоккейға, футболға йөрөгән балаларға аҙ сығымдар китәме? Ә ысынында был спорт төрҙәре беҙҙең халыҡтыҡы түгел. Уларға беҙҙең барым юҡ. Беҙҙең шөғөлдәр - улар көрәш, ҡул, ҡылыс һуғыштары, уҡ атыу. Ниңә беҙ бөгөн ҙур спортта юҡ? Сөнки сит юлға, шөғөлгә ынтылабыҙ. Үҙебеҙгә хасын онотҡанбыҙ. Әле бына егеттәребеҙ көрәш, ҡул һуғышы төрҙәрендә күренә башланы. Улар тәғәйен урындарын тапҡан, тулыһынса асыла, рухтарын иреккә сығара ала был алышта. Һәм еңә лә. Ә уҡ атыуҙы йәштәргә өйрәтеү буйынса идеялар бар, улар үҙ ваҡытын көтә.

**Бына һеҙ, ғаилә башлығы, балалар атаһы, күренекле ирҙаман. Шөғөлөгөҙ - атлы ғәскәр. Һеҙ уҡ, ҡылыс, һуғышсы кейемдәре булдырыуға бөтөн буш ваҡытығыҙҙы, аҡсағыҙҙы сарыф итәһегеҙ. Быға ғаиләгеҙ, яҡындарығыҙ нисек ҡарай? "Уйнап йөрөйһөң" тип әйтеүселәр юҡмы? Ғөмүмән, нимә этәрә һеҙҙе был ғәҙәти булмаған мауығыуға, ниндәй тойғолар бирә был һеҙгә: ҡәнәғәтлекме, азартмы, адреналинмы, тигәндәй...**

- Белгегеҙ килһә, минең ғаиләм дә үҙем кеүек үк. Ҡатынымдың да, балаларыбыҙҙың да, ҡайнымдың да милли кейемдәре бар. Бөтөн ғаилә менән "Милли кейем" парадында ҡатнаштыҡ. Ҡатыным шөғөлөмдөң ябай мауығыу ғына түгеллеген, ул минең эске донъям сағылышы икәнен аңлай, сығымдарға ла күҙ йома, рәхмәтлемен уға. Ҡатын ире өсөн шундай булырға тейеш тә, йәғни ысын башҡорт ҡатыны.

Мине быға нимә этәрә, тигәнгә килгәндә, ошоларҙы әйтер инем. Эйәрле-йүгәнле ат һәр башҡорт күңелендә ята. Бары әлегә халыҡ башҡорт атлы ғәскәренең нимә икәнен аңлап етмәй. Уның яу яланында ниндәй ҡөҙрәткә эйә икәнен дә белмәй. Борон-борондан атлы яугирҙың ниндәй юлдар, ниндәй ер-һыуҙар кисеп, ниндәй генә алыштар аша үтеп килеүен барлай башлаһаң, башҡорт ҡатнашмаған яу булмағандыр ул, тигән фекергә киләһең. Шуларҙы онотоу - енәйәт. Шул уҡ ваҡытта атлы яугирҙың ҡоралын, йыһаздарын, алымдарын, уға бәйле ауыҙ-тел һәм башҡа ижадты ла өйрәнеү - милли мәҙәниәтебеҙ ҙә. Юғиһә, беҙҙә көнкүреш мәҙәниәте генә өйрәнелә. Ә яу, яугир, ғәскәр юҫыҡтары төшөп ҡалған.

Башҡорт яугирҙары Ислам дине килгәндән алып динле булған. Был уларҙың еңелмәҫ булыуының нигеҙелер ҙә әле. Башҡорт атлы дивизияһының танктарға ҡаршы ҡылыс менән күтәрелеүен, ситтәр, бәлки, ахмаҡлыҡ та тип ҡарайҙыр, әммә мин уларҙың шул мәлдәге кисерештәрен аңлайым. Улар шулай үлемгә барған. Ошо тойғо, ил өсөн, ерең өсөн изге яуҙа шәһит китеү - сөннәт. Һәм беҙҙең милләтте лә әлеге буталсыҡ заманалар һаҙлығынан, эскелек ҡоллоғонан, моңһоҙлоҡтан, эшһеҙлектән тик дин, бары тик дин генә ҡотҡарасаҡ. Әммә диндең дә бөгөн 73 төрлө йүнәлеше бар. Шул тармаҡтарҙан дөрөҫөн табып, рухи яҡтан таҙарынып, сәләмәт милләт үҫтерергә кәрәк.

**Һеҙ күптән түгел генә Ҡырғыҙстанда үткән Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындарында ҡатнашып ҡайттығыҙ. Ниндәй тәьҫораттар тыуҙырҙы был сәфәр? Ниндәй һабаҡтар алдығыҙ? Нисек ҡабул итте ҡырғыҙҙар башҡортто?**

- Дөйөм алғанда, был сәфәр үҙе бер оло һабаҡ булды. Беҙ күсмә халыҡтар уйындарын ысынлап "уйнай" белә торғандарҙы күреп, улар менән көс һынашып ҡараныҡ. "Һынаштыҡ" тип әйтә алмайым, әлегә "һынашып ҡараныҡ" ҡына, сөнки әлегә ундай уҡ көсөбөҙ юҡ. Беҙ әлегә ныҡлап атта ла ултыра, кирелеп китеп уҡ ата ла, бил һындырып көрәшә лә белмәйбеҙ икән. Әммә өйрәнә башлағанбыҙ һәм, менталитетыбыҙға һалынған булараҡ, тиҙ арала оҫтарырбыҙ ҙа, тип уйлайым. Тик был этник спорт төрҙәрен үҫтереү өсөн үҙешмәкәрлек кенә аҙ, дәүләт яҡлауы, дәүләт булышлығы мотлаҡ һәм зарур.

Башҡорттарҙы барыһы ла белә, тип тә әйтә алмайым. Күптәрҙе үҙебеҙ менән таныштырырға тура килде. Был да әлеге "йөрөп, күренеп өйрәнмәгәнлектән"дер.

Әлбиттә, фәһем алыр, сағыштырыр нәмәләр ҙә булманы түгел. Мәҫәлән, мин ҡырғыҙҙарҙың артыҡ ҡунаҡсыл түгеллеген самаланым. Беҙҙәге кеүек, тирмәгә саҡырып ҡымыҙ эсереүсе, аш-һыу тәҡдим итеүсе булманы. Халыҡтың ҡырыҫыраҡ икәнлеге лә тойолдо, шаяртыуҙы, мәрәкәләүҙе аңламайҙар. Былар үҙҙәре үк күп нәмә хаҡында һөйләй.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтер инем: ике йылға бер ойошторолған Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындарының бишенсеһен үҙебеҙҙә ойошторорға ине. Был, беренсенән, бөтөн ошо этник мәҙәниәтте үҫтереүгә булышлыҡ итер, ҡайһы бер нәмәләргә ҙур стимул булыр ине. Икенсенән, милләтте был өлкәлә донъяға танытыуға ла мөмкинлектәр асасаҡ. Әммә ул эшкә әҙерлекте бөгөндән башларға кәрәк.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**



***ЮЛАЙ ҒӘЛИУЛЛИН:***

*Атлы яугирҙың ҡоралын, йыһаздарын, алымдарын, уға бәйле ауыҙ-тел һәм башҡа ижадты ла өйрәнеү - милли мәҙәниәтебеҙ ҙә. Юғиһә, беҙҙә көнкүреш мәҙәниәте генә өйрәнелә. Ә яу, яугир, ғәскәр юҫыҡтары төшөп ҡалған.*

***✓ Яна ҙур ағас карауатта ята, аҡ яҫтыҡта ҡара бөҙрә сәстәре һибелеп таралған. Йөҙө бер аҙ һурыла төшһә лә һаман да күркәм, ылыҡтырғыс сөйөлгән ҡыйғас ҡаштары аҫтынан һүрәнлеген юғалтҡан һоро күҙҙәр һораулы ҡарайҙар.***




Икенсе ҡатҡа күтәрелдек. Лыков артынан кабинет ишеген япты, бикте бороп уҡ ҡуйҙы.

- Һеҙ миңә бик йәшерен, дәүләт кимәлендәге серҙе асырға йыйынаһығыҙ буғай, Иван Иванович?

- Йәшерер бер ни ҙә юҡ, иллә урын-еренә еткереп һөйләшеп алырға кәрәк. - Түргә, өҫтәл артындағы урынына ултырып, эйәген терһәкләнгән йоҙроғона терәне, тамағын ҡырҙы.

- Уфтаныуығыҙға ҡарағанда, һөйләшеү үтә лә етди булмаҡсы, иптәш өлкән лейтенант?

- Етеҙлектә маҡтағас та һин улайтып аттарҙы ашыҡтырып ҡыума, йәме, башта эргәмдән урын ал, һерәймә, былай ҙа ҡолға кеүекһең.

Стена ҡырындағы ултырғысҡа ултырып, йөҙөмдө етдиләндерҙем.

- Ауыр һәм яуаплы эш йөкмәтергә булдыҡ һиңә. Әлбиттә, был устав нигеҙендәге һалдат бурысын башҡарыу түгел. Баш тарта алаһың.

- Ә мин эш биргән саҡтарында күп итеп йөкмәп алырға яратам, Иван Иванович.

- Егетләнеп тә китмә, сабыр ғына тыңлап бөт башта. Һин баш тартҡан осраҡта икенсе берәү менән һөйләшергә уның ризалығын алырға тура киләсәк.

- Икенсе кеше тигәнегеҙ кем була инде?

- Һайлап алырға күп түгелһегеҙ, йә һин, йә Диденко.

- Ниндәйерәк яуаплы эш башҡарырға тейешмен?

- Әйтәм бит, кисә Иван Гаврилович кәңәшкә саҡыртып алды. Слуквиндарҙың хәле шәптән түгел... Моғайын да, ишеткәнһеңдер?

Вайымһыҙлығым һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты:

- Ишеттем, Иван Иванович... - Штаб кабинетындағы һымаҡ, тәнемдән һалҡын тулҡын йүгереп үтте. - Ишетһәм дә ышанырға теләмәй, яҡшыға юрай инем...

- Янаның сәләмәтлеге яҡшыға юрауҙан, операция яһауҙан үткән. Беҙ уның ғазаптарын бер аҙ еңеләйтә, ыҙаланыуын һуҙа ғына алабыҙ.

- Тимәк, уға даими рәүештә ауыртыныуҙы баҫа торған уколдор ҡаҙарға?..

- Хәле шуларға ҡалды. Алты сәғәт һайын. Промедол йә омнопон. Теүәл алты сәғәт һайын. Көнө-төнө. Һауа торошоноң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан. Ҡала больницаһынан даими рәүештә йөрөп укол ҡаҙай алмайҙар, был мөмкин дә түгел. Яна былай ҙа ошоғаса шунда ятты бит инде, хәҙер уны ял иттереп алыу һылтауы менән өйөнә ҡайтарҙылар. Слуквиндарға беҙ ҙә ҡулдан килгән ярҙамды күрһәтергә тейешбеҙ.

- Мин бит хәрби часта, нисек итеп тотҡарлыҡһыҙ сығып йөрөргә?

- Уныһына ғына ҡалған көндө. Срокһыҙ пропуск әҙерләп бирерҙәр. Ара алыҫ та түгел, яҡын да түгел - өс саҡрым. Шуны тәүлек әйләнәһенә таҡырларһың. "Тиҙ ярҙам"ды был маҡсатта ҡайһылайтып файҙаланмаҡ, әйләнгән һайын машина ҡабыҙып булмай. Бына ошондай яуаплы һәм ауыр бурыс. Бик кәрәктә күрше подъезда йәшәйем бит, үҙем сығырмын. Ҡабатлап әйтәм, тәҡдимдән баш тарта алаһың, ул осраҡта һөйләшеү беҙҙең икәү араһында ғына ҡала.

- Ә бындағы ҡабул итеү эштәрен кем башҡарыр?

- Бына һиңә, әбекәйем, Юрьев көнө! Яҡшымы-яманмы, мин дә терапевт-педиатр ҙа баһа! Ә башҡа мәшәҡәттәр сыҡҡанда Диденкоға көн ҡала.

- Ҡасандан йөрөй башларға?

- Әле әйткән ампулаларҙы йүнләгәс. Уларҙы табыу еңел түгел икәнлекте һиңә аңлатып тороу урынһыҙ. Госпиталь начальнигының үҙенән махсус рөхсәт кәрәк. Наркотиктарҙы бында ҡайтарғас та уларҙың ҡулланылыуы хаҡында отчет бирергә тура киләсәк. Янаның янына ике ай самаһы йөрөрһөң, күп тигәндә, өс ай, шунан да ары түгел...

- Һәм һуңғыһы. Пациент ниндәй хәлдә лә дауалаусыны, процедура яһаусыны һайларға хоҡуҡлы.

- Был хаҡта әйтергә теләмәгәйнем. Яна һинең уколдар ҡаҙауыңа ҡырҡа ҡаршы икән.

- Һөйләшеүҙе ошонан башларға кәрәк ине лә. Һеҙ ҡушҡан бурысты башҡарырға әҙермен, тик ауырыу мине күргеһе килмәй түгелме?

- Был подполковник Слуквиндың ҡарары. Ул һинең йөрөүеңде теләй. Тәҡдим үҙ иркеңә ҡуйылһа ла саҡырыуҙы тайпылышһыҙ үтәлергә тейеш бойороҡ итеп ҡабул ит...

* * *

Хәрби бойороҡ икәнлекте белдерергә теләптер, штабтан шылтыратып, бөгөн көндөҙгө ун икегә ҡалалағы офицерҙар йәшәгән йортҡа барырға ҡуштылар. Ни өсөн икәнлекте аныҡлап әйтмәһәләр ҙә билдәле, һәр хәлдә, миңә билдәле. Иртә тандан йөрәк урынынан ҡупты, тотонған һәр шөғөлөмдөң рәт-сүрәте күренмәй, ҡулдан шыуып, ысҡынып бара, башҡарғаным да тейеш булған өсөн генә эшләнә һымаҡ. Ашхананың торошо, дежурство барышын тикшереп, санчасҡа ҡайтышлай штаб эргәһендә подполковник Слуквинды тап иттем. Ул машинаһынан сығып ҡына тора ине. Честь биреп уҙҙым. Был мине тағы күрмәмешкә һалышып, ҡарашын ситкә алды. Әҙәп йөҙөнән булһа ла сәләмемде алһа, ни була инде, әйтерһең, мин уның өсөн буш урын, саҡ ҡына булһа ла иғтибарға лайыҡһыҙ зат. Кәйеф китте.

Санчасҡа һыуыҡ алдырып, ике курсант килгән икән. Уларҙы тикшереп, эсергә дауалар биреп сығарғас, көнкүреш бүлмәһендә кителемде үтекләп алдым, ялтыратҡансы итектәремде таҙарттым, шинелемде, кәпәсемде щеткалап, элгескә элдем. Стеналағы көҙгө алдына баҫып, ентекләп ҡырындым, биттәремә, муйыныма һаҡлап, ҡәҙерләп тотонған "Мәскәү" одеколонын һөрттөм. Аптекаға инеп, ҡултамғамды ҡуйып, Герасимовтан наркотиктар алып, шприцтар һалынған стерилизаторҙы әҙерләнем. Сәғәт иртәнге ун. Хәҙер Андрейға бөгөнгө башҡараһы эштәрҙең айышын төшөндөрөрмөн, улай тиһәң, ул да фельдшер бит әле, нимәнең ҡайҙа ятҡанлығын күрһәтһәм, шул да еткән. Уныһы ла оҙаҡ ваҡытты алмаҫ. "Итәгеңә ут ҡапҡандай ҡыланып ҡуҫтарланаһың да бит, үҙеңдең ни ҡыланғаныңды аҙағынаса аңлайһыңмы, хыялый? Һин бит ҡыҙ янына беренсе осрашыуға, йәиһә мәҙәни тамашаға түгел, үлемесле ауырыу менән сирләгән ҡатындың янына бараһың! Лыков әйтмешләй, ғазаптарын еңеләйтеү, ыҙаланыуҙарын һуҙыу өсөн. Ә Яна янына йөрөүемде теләмәй. Бөтөнләй күргеһе килмәүе лә бик ихтимал, унда кеше ҡайғыһымы! Ире лә аптырағандың көнөнән мине һайлағандыр, ни тиһәң дә, һәйбәт иҫәптәмен. Бәлки, был өҫтәмә мәшәҡәттән ваҡытында баш тартырғалыр? Әлегә һуң түгел. Әйҙә, бошмаҫ йөнле, тупаҫ фиғелле, ҡалаға сығырға йәтеш һылтау эҙләгән Диденкоға ҡушһындар. Ә уның Янаның янына барырға, уға ҡағылырға, һүҙ ҡушырға хаҡы бармы? Юҡ, тағы ла бер тапҡыр юҡ! Баш тарттым да икән, ти, ниндәй сәбәп табырға ул саҡта? Егетлек түгел был. Хәйер, ниңә әле үҙемде-үҙем алдайым, Янаны күргем килә бит, янына атлығып торам. Барам, бармай булдыра алмайым. Тегендә үҙемде нисегерәк тоторға? Уға ҡайһылайтыбыраҡ төбәлермен: йәлләпме, ҡыҙғаныпмы? Өндәшмәҫкә, артыҡ хәбәр һөйләмәҫкә, күрһәң дә күрмәҫкә, күберәк тыңларға. Бына ошондай ауыр ролде башҡарырға тура киләсәк миңә..."

...Ишек янындағы звоноктың ҡара кнопкаһына баҫтым. Теге яҡта наҙлы ҡыңғырау тауышы ишетелде. Слуквин асты, һүҙһеҙ генә мине эскә үткәрҙе.

- Килдеңме, старшина? Һаумы?.. - Ым-хәрәкәт менән саҡырҙы - Әйҙә, бында инәйек, һөйләшеп алаһы бар.

Аш бүлмәһендә атлас халат кейгән, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ерән төҫөндәге сәстәрен ҡабартып ебәреп, лакҡа ҡатырған, ҡойолған ҡаштарының урынына ҡабаттан нәҙек итеп ҡыйғасландырып ҡаш һыҙған, йоҡа ирендәренә асыҡ ҡыҙыл помада яҡҡан, ҡартлыҡ билдәһе - ваҡ сырыштарын крем һөртөп, пудра яғып тигеҙләгән оло йәштәрҙәге ҡатын ҡаршы алды. Ул ҡулдарын ҡаушырып, тәҙрә янағына һөйәлде. Килешһеҙ, саманан арттырып ебәреп биҙәнеүтөҙәнеү ылыҡтырмай, ҡартайыуы еткән йөҙҙө йәмләмәй, киреһенсә, йәлләү, ҡыҙғаныу хисе генә уяна. Балсығы ҡойолған, стеналары арлы-бирле аҡланған, серегән тәҙрә рамдары буялған иҫке ағас йортҡа оҡшаған...

Мыҫҡыллы, түбәнһетеүле уйымды һиҙенгән ҡатын, үсеккәндәй, тәҙрә яғына ҡарап һыртын ҡуйып баҫты.

- Таныш бул, Янаның әсә хөкөмөндәге апаһы Елизавета Петровна. Ул беҙҙә йәшәйәсәк, миңә эшкә йөрөргә кәрәк бит, Янаның яңғыҙын ҡалдыра алмайым.

Медицина сумкаһынан стерилизатор сығарҙым:

- Бында шприцтар. Ҡайнатып килтерҙем.

- Уларҙы Елизавета Петровна даими әҙерләп торор. Бында килерҙән алда Иван Иванович һеҙгә, моғайын да, инструкция үткәргәндер.

- Так точно. Үткәрҙе.

- Ампулаларҙы көн һайын ҡала буйлатып кеҫәлә йөрөтөү ҡәтғи тыйылған эш. Ни тиһәң дә, наркотиктар. Уларҙы аптеканан үҙем алырмын да, бында, сейфта һаҡларбыҙ. Төндә унда-бында йүгермәләү йәйәү кешегә яйһыҙ, шуға күрә раскладушка ҡуйырбыҙ, ошонда аш бүлмәһендә йоҡларһың.

- Кәрәкмәгәндә маҙаһыҙлап, бәләмде һалып өйрәнмәгәнмен, әгәр мөмкин булһа, часҡа ҡайтып йөрөргә рөхсәт итегеҙ, иптәш подполковник?

- Уныһын үҙең ҡара, нисек ҡулай. - Ҡатынға мөрәжәғәт итте. - Елизавета Петровна, часҡа барам, кәрәк була ҡалһам, теләһә ниндәй мәлдә лә шылтыратығыҙ.

Тегеһе ризалығын белдереп башын ҡаҡты.

Слуквин сығыу яғына йүнәлде лә эйәген ҡағып, миңә артынан эйәрергә ҡушты. Үткелектә йомшаҡ шипатайҙарын сисеп, итеген, кейем шкафынан шинелен алып кейҙе, стенаға ҡағылған оваль көҙгөгә ҡарап, кәпәсендәге кокарданы маңлай тапҡырына тап килтереп, ҡул һырты менән үлсәп тигеҙләгәс, минең яҡҡа ҡырыҫ ҡарашын атты:

- Бына нимә, доктор, һеҙҙең төп шөғөлөгөҙ ҡатыныма көнөнә дүрт тапҡыр инъекция яһау. Ауырыу менән әңгәмә ҡормауығыҙ хәйерле, ауыр сиренә ярашлы, уның кәйефе тиҙ үҙгәреүсән.

- Ваши пожелания буду учитывать, товарищ подполковник.

- Не учитывайте, а выполняйте! - Ишекте ҡаты ябып сығып китте.

Өс бүлмәле фатирҙың ҙур залы аша йоҡо бүлмәһенә килдем, һаҡ ҡына ишекте ҡаҡтым.

- Инегеҙ... - Эс яҡтан хәлһеҙ саҡырыу ишетелде.

Яна ҙур ағас карауатта ята, аҡ яҫтыҡта ҡара бөҙрә сәстәре һибелеп таралған. Йөҙө бер аҙ һурыла төшһә лә һаман да күркәм, ылыҡтырғыс, һораулы сөйөлгән ҡыйғас ҡаштары аҫтынан һүрәнлеген юғалтҡан һоро күҙҙәр һораулы ҡарайҙар.

- Добрый день, Яна Григорьевна, вот я пришел...

- А я вот лежу... - Һығылып сыҡҡан ике бөртөк күҙ йәше еүеш юлаҡ ҡалдырып, сикәләре буйлап түбәнгә һарҡты. - Һеҙ теге саҡ оҙаҡҡа һуҙмай поликлиникаға барырға ҡушҡайнығыҙ. Һуҙҙым да һуҙҙым. Сирем үҙенән-үҙе үтер һымаҡ ине. Әгәр ҡушҡанығыҙҙы эшләһәм, бәлки, өлгөрөр ҙә инем. Мин сабыр йән ул, бөтәһенә лә түҙәм, тик бынау һыҙланыу үҙәккә үтә. Сыҙар әмәл ҡалманы...

Уңғансы эргәбеҙгә ингән Елизавета Петровна стерилизаторҙы яңынан ҡайнатып алыуын хәбәр итте.

- Давайте будем делать укол. Теперь к вам буду ходить регулярно.

- Үҙ теләгегеҙ менәнме, әллә бойороҡто үтәпме кенәме?

- Үҙ теләгем менән тип әйтһәм, ышанырһығыҙмы?

- Ышанам.

- Ҡулығыҙ йомшаҡ, еңел икән, бөтөнләй беленмәне лә тиерлек. Мускулдары бушай төшкән беләк простыня эсенә йәшеренде. Биниһая ваҡыт һүҙһеҙ ҡалдыҡ. Бына Яна көтмәгәндә ҡулына эләккән һаплы тарағын ишек яғына елгәреп, иҙәнгә яҫтығын ырғытты ла, йөҙөн түшәгенә йәшереп, үкһергә тотондо, үҙе аҡылдан яҙғандай һөйләнде:

- Ялҡтым был донъянан, ялҡтым барыһынан, нимәгә миңә ыҙаланып, башҡаларҙы ыҙалатып йәшәргә! Йәшәгем килмәй, үлгем килә! Үлгем!

Ишек ауыҙында Елизавета Петровна күренде, йөҙө хафалы.

- Апай, сыҡ, үтенәм, сыҡ, беҙҙе аҙға ғына ҡалдыр!

Тегеһе нисек шым килеп инһә, шулай өнһөҙ-һүҙһеҙ юҡҡа сыҡты.

**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЙӘНШИШМӘНЕҢ ҺЫУЫН ЭСМӘГЕҘ!

**Бөгөнгө көндә "Урал батыр" эпосына ҡарата иғтибарҙың бермә-бер артыуы, ғалимдарыбыҙҙың уның йөкмәткеһенә, һәр һүҙенә тиерлек иғтибар биреп, киң ҡатлам уҡыусыларға аңлатыуы, һис шикһеҙ, шатлыҡлы күренеш. Халыҡ ижадында күп ҡиммәтле фекерҙәр тел төбө, кинәйә менән әйтелә һәм аңлатма биреүҙе, фекерҙең әрәсәһенә төшөндөрөүҙе талап итә.**

Ысынлап та, эпосыбыҙ аңлап-аңлатып бөткөһөҙ сер хазинаһы. Шундай серле һүҙҙең береһе - Йәншишмә. Нимә ул Йәншишмә? Әлбиттә, ул - бөтөн донъяға йән бөркөүсе тере һыу, тереклекте йәшәтеүсе. Ә тағы ниндәй серҙәр йомолған был һүҙҙә?

*Ебәрегеҙ һеҙ мине,*
*Үҙ илемә ҡайтайым.*
*Мине сәйнәп йотоп та,*
*Барыбер аш булмамын,*
*Һис аш булып һеңмәмен;*
*Йәншишмәнән һыу алып,*
*Әсәм тәнем йыуҙырған,*
*Үҙ нурына һуғарған*
*Барығыҙға билдәле*
*Ҡояш тигән әсәм бар...*

Әсәһе Ҡояш ҡыҙы Һомайҙың тәнен Йәншишмә һыуы менән йыуғандан һуң, Һомай илде нурға күмеүсе көскә эйә була. Көндөҙөн дә, төнөн дә Йыһан, Кешелек донъяһы ошо ҡеүәттән файҙалана, тереклек итә. Йәншишмә - кешелек донъяһының йәшәү сығанағы, йәғни халыҡтың уртаҡ байлығы. Ошо халыҡ байлығын һәр көс үҙенсә файҙаланырға ынтыла. Ҡара көстәрҙән булған Зәрҡум Шүлгәнде Әзрәкәгә - дейеү батшаға барырға, "Йәншишмәнән һыу алырға" димләй. Шулай итеп, Йәншишмәне бер төркөм яуыз көстәр үҙҙәре генә файҙаланырға ниәт тота. Дейеү батшаға ғына биләп торғанлыҡтан, халыҡ тәбиғәттән бирелгән, һәр йән эйәһе тигеҙ файҙаланырға тейешле бәхеттән мәхрүм. Һомай ошо шишмәне табыу, яулап алыу юлын Уралға өйрәтмәксе. Уралдың ниәте изге:



*- Шишмәнән һыу алайыҡ,*
*Үлгәнгә йән бирәйек,*
*Кешеләрҙе донъяла*
*Үлмәҫ йәндәр ҡылайыҡ,* - тигән хыял менән Әзрәкәгә ҡаршы көрәшкә күтәрелеп, еңеүгә өлгәшмәксе.

Әммә Йәншишмәнең һыуын эсеп, үлә алмай йөрөгән ҡарт Уралды был ниәтенән кире дүндерә:

*- Егет, һиңә килдем мин,*
*Килеп хәлем әйттем мин,*
*Ҡолаҡ һалһаң һүҙемә,*
*Әйтә торған һүҙем бар;*
*Илгә йола булырҙай,*
*Һынап белгән заңым бар:*
*Донъяла мәңге ҡалам, тип,*
*Үлемгә буй бирмәҫкә,*
*Уны бер заң итмәҫкә,*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ,*
*Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ.*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ!* - ти ҡарт. Тимәк, мәңге йәшәйем тип уйламағыҙ, халыҡ байлығын таламағыҙ, халыҡ байлығына ҡул һуҙмағыҙ, тигән фекер әйтә. Әгәр халыҡ байлығына ҡул һуҙһаң:

*- Тәнең сереп ҡорт ашар,*
*Шунда ла һин үлмәҫһең,*
*Һис донъянан китмәҫһең...*

Кеше мәңгелек түгел, унан ҡалған хәтер мәңгелек. Яҡшылыҡ ҡалдырамы ул, яманлыҡмы... Һәр кеше ике төрлө йәшәүҙән һәм ике төрлө үлемдән тора: физик һәм рухи йәшәү һәм үлем. Фани донъянан киткәндән һуң һинең рухи тормошоң дауам итә. Нәфсеңде, ҡомһоҙлоғоңдо тыя алмай, Йәншишмәнән һыу эсһән, йәғни халыҡ байлығына ҡул һуҙһаң, яманлығың бәлйерәгән ҡарт һымаҡ йөрөп ятасаҡ. Ә инде ошо ҡарттың һүҙенә, аманатына тоғро ҡалған саҡта:

*- Мәңге ҡалам, тимәгеҙ,*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ,*
*Донъяла мәңге ҡалыр эш -*
*Донъяны матур төҙөгән,*
*Бағты мәңге биҙҙәгән -*
*Ул да булһа, яҡшылыҡ,*
*Күккә лә осор яҡшылыҡ,*
*Һыуға ла батмаҫ яҡшылыҡ,*
*Утҡа ла янмаҫ яҡшылыҡ,*
*Телдән дә төшмәҫ яҡшылыҡ,*
*Бары эшкә баш булыр,*
*Үҙеңә лә, кешегә*
*Мәңге йәшәр аш булыр...*

Шулай итеп, Урал батыр Йәншишмәнең һыуын уртлап алып, Ер йөҙөнә бөркә.

Халыҡ аҡылын, аманатын үҙ эсенә йомған, кешелек донъяһына йәшәү мәғәнәһен аңлатҡан "Урал батыр" эпосын тотош белмәгән сүрәттә лә ошо өлөшөнә ҡолаҡ һалһын ине йәмәғәт. Эпостағы ошо һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөн үҙе өсөн иҫбат итергә теләһә, халыҡ байлығына ҡул һуҙған, нәфсеһен тыя алмай "Йәншишмәнән һыу эскән" ҡомһоҙҙарҙың да мәңгелек түгеллеген, хилаф малдың ғүмер өҫтәмәгәнлеген, балаларына ҡалдырған хилаф малдың нисек әләф-тәләф килгәнлеген, фәҡәт хәләл табылған малдың ғына:

-Үҙеңә лә, кешегә
Мәңге йәшәр аш булыр, - икәнен үҙ күҙҙәрегеҙ менән күреп, үҙ заңығыҙға һеңдереп алығыҙсы, тип әйтке килә.

Йәншишмәнең һыуына талаш-ыҙғыштың донъяны һәләкәткә килтереүе лә ихтимал бит...

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ЗАУЫҠ

# БӨГӨН-ИРТӘН ГЕНӘ КЕШЕЛӘРГӘ

*Фәнис СИРБАЕВ*



## Аҡыл ултырыуы икеле...

### Йәшәүме ни...

Йәшәүме ни -
Бөркөт һымаҡ
Болоттарҙы ярып осмаған,
Сәмле ҡараш ташлап күккә
Һыҙланмаған,
Эсең бошмаған?
Йәшәүме ни -
Ярһып йөрәк,
Бурандарға ҡаршы бармаған,
Йән аямай,
Дөрөҫлөккә
Ғүмер буйы тоғро ҡалмаған.
Йәшәүме ни -
Вайымһыҙлыҡ
Булған булмышыңды ялмаған.
Халҡыңа йылылыҡ эҙләп,
Көлгә ҡалып,
Дөрләп янмаған...

* * *

Көсһөҙ утты
Ел һүндерә,
Ә көслөһөн көсәйтә.
Тормош еле, кешеләрҙең
Көслөләрен кеш(е) итә.

Көсһөҙҙәрме?
Улар инде
Көлгә ҡала туҙырап.
Ҡаршы елдә көсәйерлек
Ут булыу, дуҫтар, мотлаҡ!

***

Алдан көткән дошман арттан килде,
Яуһыҙ баҫып алды илемде.
Ике йыл да бер ай һаҡланым мин,
Йәшел бағаналы сигемде.

Тыныс йоҡла халҡым, погран Фәнис,
Тәүлек әйләнәһе дозорҙа.
Кем уйлаған дошман өйҙә, тиеп,
Кимерә тип илде тамырҙан.

Совет герблы, ғорур бағаналар -
Йәшел-ҡыҙыл, йәшел-ҡыҙылдан;
Һеҙ тереме әле?
Ныҡ тороғоҙ!

Тик шуныһы,
Беҙҙең бөйөк дәүләт...
Беҙ һаҡлаған дәүләт
Йығылған.

### Икеле

Ағастарҙы йыҡҡан ҡорттар кеүек,
Ер күкрәген ярып, тишкеләп,
Мыжғып тора эшем әйәләре,
Таш ташыйҙар ныҡлы кешеләр.

Таш өйәләр бейек тауҙар яһап,
Үкерәләр көн-төн "Белаз"дар.
Белмәйҙәрме: Ерҙән көлгән өсөн
Тәрән төпкөлдәрҙән килер зар?

Дәү ағасты, эйе, ҡорттар йыға,
Ерҙе йыҡмаҫ тимә кешеләр.
Аяҡ аҫтарында ер сайҡалһа,
Ай, кешелек, бахыр, ни эшләр?

Хоҙай ҡорған был донъяны бәндә
Үҙгәртмәксе була үҙенсә,
Йылғаларҙы бора, шишмә быуа,
Оло хаталыр был, минеңсә.

Хоҙай һаҡлар микән беҙҙе, әллә
Баш тартырмы беҙҙән, ташлармы?
Туҡта! Ҡапыл ниҙер гөрһөлдәне -
Карьерҙағы ауыр таштармы?

Йылғалағы тирәк әллә ауҙы,
Ҡорт тишкеләп тамам йөҙәткәс.
Уяндылар эттәр, лауылданы,
Йәнә йөҙ йорттағы йөҙ этәс.

Әллә оло быуа емерелде
Ярһыуҙары һыймай ярына,
Әллә тимер тештәр ҡаҙалдылар
Йоҡо бирмәй тағы Еремә.

Хоҙай һаҡлар микән беҙҙе, әллә
Баш тартырмы беҙҙән бөтөнләй...
Һуңғы ваҡыт кешеләрҙең хәле
Көтөүсеһеҙ ҡалған көтөүҙәй.

Йәйгә һалынырмы беҙҙең тормош,
Төшмәҫ борон башҡа язалар.
Ә әлегә йоҡо бирмәй һаман
Шағыр-шоғор соҡор ҡаҙалар.

Тишкеләйҙәр һаман Ерҙең тәнен
Ағас йыҡҡан ҡорттар шикелле.
Бөгөн-иртән генә кешеләргә
Аҡыл ултырыуы икеле...

### Ике тирәк

Ике тирәк кенә тороп ҡалған,
Күңелемдең ике терәге.
Атай нигеҙҙәре онотолған,
Емерелә инде йөрәгем.

Ике тирәк кенә тороп ҡалған -
Ҡартатайым менән Оләсәй,
Икәүһе лә шаулап япраҡ ярган,
Тик барыбер әрнеп йән әсей.

Ике тирәк кенә тороп ҡалған,
Ҡайҙа минең бала саҡтарым?
Эҙләйемме икән әйләндереп
Аунап ятҡан нигеҙ таштарын?

Ике тирәк кенә тороп ҡалған,
Тешләйемме икән терһәгем?..
Таныш эҙҙәр, таныш әйбер эҙләп
Томалана бара күҙҙәрем.

Ике тирәк кенә тороп ҡалған,
Күңелемдең ике терәге.
Өй урыны - ялан, ялан, ялан...
Емерелде шағир йөрәге...

✓ Көн дә йоҡлар алдынан тамаҡты тоҙ, сода иретмәһе менән, аҡсәскә, тырнаҡ гөлө, шалфей төнәтмәләре менән сайҡатыу ҙа сирҙән һаҡлар. Һарымһаҡ, һуған, бал, гөлйемеш сирҙән һаҡлаусы тәбиғи саралар икәнен дә оноторға ярамай.



ИНТЕРНЕТТАН



# ЯЛҠАУЛЫҠ...
## тыҡланыуға бәйлеме?

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндән һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ҡулланыусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында кальций һәм калий күп, улар ҡан баҫымын көйләү һәләтенә эйә.

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре төштәр һәм ауырыуҙар араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Йоҡлаған саҡта кешенең мейеһе көн дауамында алған төрлө мәғлүмәтте генә түгел, эске ағзалар ебәргән сигналдарҙы ла анализлай. Рәсәй ғалимы Василий Касаткин раҫлауынса, ҡабатланып торған ҡайһы бер төштәр сәләмәтлек менән бәйле проблемалар тураһында һөйләй. Табип 1410 пациентты тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. Йөрәк сирҙәре ҡурҡыныс төштәр күрә, улар йыш ҡына кемдәндер ҡаса, ҡайҙандыр йығылып төшә, кемделер ерләүҙә ҡатнаша. Юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларға тәбиғәт катаклизмдары, йорттарҙың емерелеүе инә. Ҡан баҫымы түбән булған кешеләр төштәрендә йығылғаны йәҙөп сыға алмай йонсой, йә тауға күтәрелә алмай, йә ауыр йөккә көстәре етмәй. Астма ауырыуы булғандар төшөндә лә тын алыуға бәйле проблемаларға тарый. Бронхиаль астма менән ауырығандар һыуға бата, йә уларҙы ҡорон баҫа. Бауыр сирлеләргә ҡан, һуғыш, яраланыу инә. Ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙарын төшкә боҙолған ризыҡ, еҫләнгән ит йәки балыҡ инеүенән билдәләргә була. Быңдай сирлеләр тештәре төшкән икән, тип төш күреүсән. Һалҡын тейеүҙе янғын, мунса инеү белдерә, тымауланған кеше төшөндә һыуһап, һыу эҙләй. Депрессиялағы кешенең төшөнә үтеп булмаған урман, бейек стеналар, барьерҙар инә.

■ Гел дөрөҫ туҡланмау һимереүгә генә түгел, хроник арыу һәм ялҡаулыҡҡа алып килә. Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимдары ярты йыл буйына лабораторияла ҡомаҡтарҙа һынау үткәргән. Уларҙы ике төркөмгә бүлгәндәр, тәүге төркөм - шәкәрле, майлы, ҡыҙҙырылған ризыҡтар, икенсеһе сәләмәт аҙыҡ менән туҡланған. Тәүге төркөмдәге ҡомаҡтар эксперимент аҙағына һимергән. Ҡомаҡтарҙы билдәле бер шарттарҙа һалмауырға баҫырға өйрәткәндәр, шул саҡта ул ниндәйҙер бүләк - һыу йәки ризыҡҡа лайыҡ булған. Ярты йылдан һуң улар был бурыстарын насарыраҡ үтәй башлаған. 30 минутлыҡ күнекмә ваҡытында улар йышыраҡ ял иткән. "Йәки фастфуд ялҡаулыҡ һәм арыуға килтерә, йәки уның һәҙөмтәһендә һимергәндән һуң улар ялҡауға әйләнә", - ти тикшеренеүҙәрҙең авторы Аарон Блейсдел.

■ Белгестәр хәтер насарайыуының йәштәрҙә лә йыш осрай башлау хәүефен белдерә. Бигерәк тә 30 йәште үткәндәрҙә был күҙәтелә. Башлыса кешеләр өйҙән сығып киткәндә ойоҡ кейергә, күҙлек йәки аҡыс алырға, дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәһен, ПИН-кодтарҙы онота. Тикшеренеүҙә ҡатнашыусы кешеләрҙең 6 проценты йәш кеше була. Шулай уҡ күптәр хәтер насарайыуынан, уны юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡып йәшәй икән. Уларҙың һаны 31 процентты тәшкил иткән.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Бөгөн бөтөн ерҙә кизеүҙән вакцинация яһаталар - республика халҡының 25 проценты самаһы прививка эшләткән дә инде. Табиптар был сирҙең көслө ваҡыты ғинуарға тура килеү ихтималлығын күҙаллаһа ла, уҙған йылдан айырмалы, быйыл уның йомшағыраҡ үтергә тейешлеген белдерә. Шулай ҙа уның штаммдары үҙгәреп тороу сәбәпле, көтөлмәгән "сюрпризҙар" булыуы ла мөмкин. Кизеү генә тип ҡараһаҡ та, уны ваҡытында дауаламағанда йәки кеше үҙ сәләмәтлегенә битараф булғанда, аяныслы эҙемтәләргә килтереүе лә билдәле. Редакциябыҙ ҡунағы, баш ҡаланың 4-се клиник инфекцион дауаханаһы бүлек мөдире, 1-се категориялы табип Фәғилә ҠОТЛОҒУЖИНА менән был юлы кизеү тураһында һүҙ алып барасаҡбыҙ.**



# КИҘЕҮҘЕ...
## ауырымаҫҡа әҙерләнеп ҡаршылайыҡ

**➔ Кизеү - ул ниндәйерәк сир? Уның ОРЗИ, ОРВИ менән уртаҡлығы бармы?**

- Юғары тын алыу юлдарының кисәкен вирус сирҙәре (респиратор вирус сирҙәре) бөтә йоғошло сирҙәрҙең төп өлөшөн тәшкил итеп, 60 процентҡа тиклем барып етә һәм йылдан-йыл күпләп теркәлә. Рәсәйҙә был сирҙәр менән йылына 27,3 - 47,2 млн кеше ауырый. Кисәкен респиратор сирҙәрҙе барлыҡҡа килтереүсе 200- ҙән ашыу вирус билдәле. Әммә табиптар грипп, парагрипп, риновирус, коронавирус, аденовирус тип аталған төрҙәренә ҙурыраҡ иғтибар бирә.

Кизеү башҡа респиратор вирус сирҙәренән нимәһе менән айырылып тора һуң? Ул кисәкенерәк, тән температураһының бик юғары күтәрелеүенән башлана, интоксикация тип аталған синдром бик сағыу була, һуңынан юғары тын алыу юлдарының зарарланыуы билдәләре күҙәтелә. Кизеү вирусының А, В, С тип аталған өс төрө билдәле. Был вирустар тоторокло түгел, үҙгәреүсән, шуға ла йылдан-йыл кешенең иммунитеты булмаған яңы төрҙәре барлыҡҡа килеп тора. Кизеү вирусы 4 градус йылыла тирә-яҡта - бер аҙна, ноль градуста бик оҙаҡ һаҡлана, 50-60 градус эҫелек уны тиҙ юҡҡа сығара. Шуға күрә ул ҡояш нурҙары, ультразвук тәьҫирендә тиҙ үлә. Кизеү вирустары бөтә ерҙә лә киң һәм тиҙ таралып, эпидемия һәм пандемия рәүешендә сир барлыҡҡа килтерә.

**➔ Көтмәгәндә аяҡтан йығып, йылы түшәккә һалып ҡуйған был сирҙең төп сығанағы нимәлә?**

- Кизеүҙең төп сығанағы - сирле кеше. Ул ауырый башлағандың беренсе сәғәттәренән алып 3-5-се көндәргә тиклем тирә-яҡҡа вирус тарата. Кизеү сиренән һауыҡҡан кешеләрҙең 15-20 проценты тағы ла 22-30 көн вирус сығанағы булып тороуы мөмкин. Йөгни һөйләшкәндә, сөскөргәндә, йүткергәндә улар вирусты тирә-яҡ һауаға бүлеп сығара.

**➔ Ҡабатлауҙан доға иҫкермәй, тиҙәр, шулай булғас, сирҙең тәүге симптомдарын да хәтергә төшөрөп китәйек...**

- Кизеү сиренең инкубация осоро бик ҡыҫҡа - йоҡторғандан алып ауырый башлағанға тиклем бер нисә сәғәттән алып 2 тәүлеккә тиклем ваҡыт үтеүе бар. Ул бик кисәкен башлана. Бер өшөтөп, бер ҡалтыратып, тән температураһы 39-40 градусҡа тиклем күтәрелә. Юғары тән температураһы 4-5 көн тора. Был ваҡытта көслө баш һәм күҙ алмалары ауыртыуы, баш әйләнеүе, бөтә тән һыҙлауы, хәлһеҙлек күҙәтелә. Аппетит юғала, йоҡо боҙола, күңел болғаныуы, ҡоҫоу ҙа был осраҡта йыш була. Сирҙе ауыр кисергәндә аң юғалыуы, ҡул-аяҡтар тартышыуы ла ихтимал. Кизеү вирусы ҡан тамырҙарын зарарлау сәбәпле, төрлө ҡан китеүҙәр хәүефе лә бар. Сирләүҙең икенсе тәүлегенә тымау, ҡоро йүтәл барлыҡҡа килә һәм уртаса 7 көн дауам итә.

**➔ Кизеүгә иғтибар итмәгәндә, ул ниндәй өҙлөгөүҙәргә килтерергә мөмкин?**

- Был сир күп осраҡта еңел һәм уртаса рәүештә үтә. Ә инде уның ауыр формаһы, билдәләп китеүегеҙсә, төрлө өҙлөгөүҙәргә килтереүе мөмкин һәм шуныһы менән ул хәүефле лә. Иң беренсе сиратта, әлбиттә, тын юлдарының зарарланыуы - үпкәләр ялҡынһыныуы, үпкәләргә ҡан һауыуы, унда һыу йыйылыуы. Был ауыр осраҡтар сирле кешенең ғүмере өҙөлөүенә килтерә.

Шулай уҡ кизеү вирусының йөрәк-ҡан тамырҙарына насар йоғонтоһы ла билдәле. Кизеү эпидемияһы ваҡытында йөрәк-ҡан системаһы сирҙәре бермә-бер артыуы һәм үлем осраҡтары ла күберәк теркәлеүе тап ошо хаҡта һөйләй. Кизеү сиренә йыш ҡына бактериялар барлыҡҡа килтереүсе төрлө эренле-ялҡынһыныу сирҙәр ҡушылыуы ла бик йыш осрай торған күренеш. Отит, гайморит, пиелонефрит тип аталған сирҙәр кизеү менән сирләгән ваҡытта йыш теркәлә.

**➔ Сирҙе дауалауға ҡарағанда иҫкәртеү саралар үткәреүе күпкә отошлораҡ, тип ҡабатлай табиптар. Кизеү эләкмәһен өсөн ниндәй профилактик саралар ҡулланырға була?**

- Иң мөһиме - прививка эшләтеү. Рәсәйҙә гриппан вакцинаға ҡаршы күп кешенең ҡарашы ыңғай булмауы ҙур борсолоу уята. Халыҡ араһында, "прививка эшләтһәң дә, эшләтмәһәң дә барыбер сирләйһең", тигән яңылыш фекер йәшәй. Күптәр прививка кизеү вирусынан ғына һаҡлай икәнен иҫәпкә алмай. Ә респиратор вирустар бит 200-ҙән ашыу. Һәр бер кисәкен респиратор сир ул кизеү түгел! Кизеү сире тиҙ таралыусан, бер юлы күп кеше сирләй, уның кеше ғүмеренә хәүеф яһаусы өҙлөгөүҙәре күп, шуның өсөн кизеүҙән ҡурҡабыҙ һәм һаҡланырға тәҡдим итәбеҙ. Йыл һайын Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы кизеүгә ҡаршы төрлө вакциналар тәҡдим итә. Улар араһында тере вакциналар ҙа бар, һүндерелгәндәре лә бар. Рәсәйҙә етештерелгән "Гриппол" вакцинаһы, Францияла етештерелгән "Ваксигрипп", Германияла етештерелгән "Инфлювак", Бельгияла сыҡҡан "Флюарикс" вакциналары киң ҡулланыла. Быйыл вакцина эшләү сентябрь айы аҙаҡтарында башланды. Вакцинанан башҡа, кизеү теркәлә башлаған осорҙа вирусҡа ҡаршы дарыуҙар ҡулланырға ла кәңәш ителә. Дарыуханала улар бар, ирекле һатыла, профилактик миҡдарҙа ҡулланыла.

Вакцина кизеү теркәлеү башланғанға тиклем иң кәмендә 2 аҙна алдан һәм тик һау организмға ғына эшләнә. Ул мотлаҡ рәүештә: 6 айҙан ҙурыраҡ балаларға; мәктәп уҡыусыларына; урта һәм юғары уҡыу йорттары талиптарына; 60 йәштән уҙған ололарға; хеҙмәтләндереү өлкәһендә эшләүселәргә; медицина, белем биреү өлкәһендә эшләгән кешеләргә; хәүеф төркөмөнә ҡараған сирле кешеләргә: шәкәр сире, онкологик сир, ҡан сирҙәре булғандарға эшләнергә тейеш.

Шулай уҡ кизеү күпләп теркәлә башлаған осорҙа кешеләр күп булған урындарҙа йөрөргә кәңәш ителмәй, йә ундай ерҙә битлек ҡулланырға кәрәк. Бөгөнгә дарыуханаларҙа һатылған битлектәрҙе 2 сәғәт һайын алыштырып тороу зарур. Көн дә йоҡлар алдынан тамаҡты тоҙ, сода иретмәһе менән, аҡсәскә, тырнаҡ гөлө, шалфей төнәтмәләре менән сайҡатыу ҙа сирҙән һаҡлар. Һарымһаҡ, һуған, бал, гөлйемеш сирҙән һаҡлаусы тәбиғи саралар икәнен дә оноторға ярамай.

Йортоғоҙҙа берәй кеше кизеү менән сирләп китте икән, мотлаҡ рәүештә уны башҡа һау кешеләрҙән айырығыҙ. Сирле ятҡан бүлмәне еләтеп, еүеш сепрәк менән һөртөп торорға кәрәк. Бер ваҡытта ла үҙаллы дауаланмағыҙ, дөрөҫ дауаны табип ҡына тәғәйенләгәненән онотмағыҙ.

**➔ Ә прививка ярамаған осраҡтар бармы?**

- Йомортҡа ағына аллергияһы булғандарға, кисәкен йоғошло һәм бүтән сир менән ауырығанда, хроник сирҙәр әүҙемләшкән саҡта, ҡурылдайҙарҙың быума сире, үҙәк нервы системаһының, аутоиммун һәм башҡа төрлө ҡаты сирҙәр организмда булған осраҡта тыйыла.

**➔ Шулай ҙа, иммунитет ныҡ булғанда, вакцинаһыҙ ҙа кисәкен респиратор һәм кисәкен вируслы респиратор сирҙәр, кизеү менән сирләмәҫкә лә мөмкиндер бит?**

- Ғөмүмән алғанда, ысынлап та, иммунитеты ныҡ кешене атап үтелгән сирҙәр урап үтеүе бар. Һүҙ, әлбиттә, сәләмәт тормош алып барыу хаҡында. Һәр кеше үҙ һаулығын үҙе бала саҡтан хәстәрләп, сәләмәт тормош алып барһа, сирләләр һаны күпкә әҙерәк булыр ине. Сынығыу, спорт менән дуҫ булыу, саф һауала йышыраҡ йөрөү, сама менән дөрөҫ туҡланыу, хеҙмәт һәм ял режимын һаҡлау, стрестарға ҡаршы тора белеү - былар барыһы ла һаулыҡты нығыта һәм кисәкен сирҙәргә ҡаршы тора алған иммунитетты барлыҡҡа килтерә.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әңгәмәләште.**

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?



### Кем кемгә эйәләгән?

Бисура кеше күҙенә күренмәйенсә, кешеләргә яҡын йәшәүсе зат. Ғаиләлә балалар күп булһа, йәки ирле-ҡатынлы йәшәһәләр, бисура ул кешеләргә яҡын йөрөмәй, ә яңғыҙаҡ ҡатындарға, һирәкләп булһа ла яңғыҙ йәшәүсе ирҙәргә лә эйәләшә, тип һөйләйҙәр. Яңғыҙаҡ йәшәүсе ҡатындар, ғәҙәттә, бик сос була, ирҙәр эшен дә, ҡатындар эшен дә бик етеҙ башҡарып ҡуялар. Шундай ҡатындар тураһында, уға бисура эйәләгән, уның бөтә эштәрен дә бисураһы башҡара, ә үҙе уның эшләгәнен ҡарап ҡына йөрөй, тиҙәр.

Элегерәк ире һыуға батып үлгән яңғыҙаҡ бер йәш ҡатын йәшәгән. Өйләнгәс, күрәһең, улар күп йәшәмәгән, балалары булмаған. Өйҙәре ауыл осонда, башҡа өйҙәрҙән байтаҡ ҡына ситтә ултырған. Ул ҡатын шулай батыр йөрәкле булғанмы, әллә ауылда яҡын туғандары булмағанғамы, үҙе янына бер кемде лә саҡырмайынса, яңғыҙ йәшәп ятҡан булған. Шулай бер төндә яңғыҙ йоҡлап ятҡанда, ҡурҡыныс төш күрепме, әллә ауырып китепме, ҡысҡырып урамға сыға, күршеләренә килеп, ниҙәндер ҡурҡыуын, уны өйгә индереүҙәрен инәлеп һорай. Ләкин күршеләре был ҡатынды өйҙәренә индермәй. Төндөң ҡалған өлөшөн ул ҡатын нисек үткәргәндер, тик ошонан һуң ул кешеләрҙән ситләшә, уларҙан бер ваҡытта ла ярҙам һорамай.

Яңғыҙ ҡатындың, әлбиттә, аты булмаған. Шуға күрә ул йәй көндәре утынды күтәреп, ҡыш көндәре бәләкәй сана менән һөйрәп ташыған. Бәлки, ошондай эштәргә күнегеп тә киткәндер. Кешеләр иһә:

- Уға бисура эйәләгән, беҙгә күренмәһә лә, йөктәрен бисураһы күтәреп йәки һөйрәп килә икән, - тип, шикләнеп һөйләгәндәр.

- Ул ҡатындың башҡа эштәрен дә бисураһы эшләй икән, үҙе күренмәһә лә, һәр ваҡыт йәнәш йөрөй икән, - тип, шикләнеп, уның өйөнә бер ваҡытта ла бармағандар, үҙен дә өйҙәренә индермәгәндәр. Ул ҡатын нимә менән туҡланғандыр, бер кем дә белмәгән. Йәй көндәре кәртә артындағы киндер һәм алабута орлоҡтарын көндәр буйына йыйып йөрөгәнен күреүселәр булған, әммә ҡыш буйы улар менән генә туҡланамы икән, тип, бер кем дә ҡыҙыҡһынмаған. "Ашарына бисураһы килтерәләр, аҙыҡҡа мохтаж түгелдер", тип ышанғандар. Ауылда булған хәүефле эштәрҙең бөтәһен дә шул ҡатынға япһарғандар.

Ваҡыт үтеү менән теге ҡатын да олоғая, уның һайын ауылда бисуралы ҡатынға бәйле шомло хикәйәттәр күбәйә. Шулай, йәй көндәренең айлы бер кисендә бер төркөм йәш егеттәр йыйылып, урамда ултыралар. Төн уртаһы яҡынлашыуға бисуралы ҡатын йәшәгән остан улар яғына арба тәгәрмәсе тәгәрәп килеүен күрәләр. Берәй шуҡ малай тәгәрәтеп ебәргәндер, тип уйлар инең, тәгәрмәс килгән яҡ түбән, нисек итеп ул үҙ көсө менән үргә табан тәгәрәүе мөмкин? Был хәл йәштәрҙә шик уята. Бер генә егет тәгәрмәскә барып тотонорға батырсылыҡ итмәҫ ине, күмәкләгән - яу ҡайтарған, тиҙәр бит, күмәкләп, егеттәр тәгәрмәсте тотоп алалар. Тәгәрмәс ҡаршылыҡ күрһәтмәй, ебәрһәләр, тағы алға табан тәгәрәүен дауам итә. Тәгәрмәсте йығып һалып та ҡарайҙар, ул шунда уҡ тороп, тағы тәгәрәргә маташа.

Йәштәр тәгәрмәсте нисек туҡтатырға белмәй, уйға ҡала. Араларынан береһе арҡан килтереп, бәйләп ҡуйырға тәҡдим итә. Килтереп, арҡанды көнсәге аша үткәреп, тәгәрмәсте бәйләп тә ҡуялар. Арҡандың бер осон бағанаға, икенсе осон эргәлә торған ағасҡа бәйләйҙәр. Тәгәрмәс тәгәрәргә ынтылһа ла арҡан ебәрмәй тотоп тора. Егеттәрҙең араһынан берәүһе "әлхәм" сүрәһен белә икән, ул шул сүрәне уҡып өшкөрә лә, иртәнсәк осрашырға һүҙ ҡуйышып, таралалар. Иртәнсәк бик иртә менән тәгәрмәс янына килгәләр һәм ни күрәләр: кисәге тәгәрмәс урынында теге "бисуралы" ҡатын ята. Егеттәрҙе күргәс, үҙен бәйҙән ысҡындырыуҙарын һорап инәлә башлай. Йәлләп, ҡатынды ысҡындыралар, унһы шәп-шәп атлап, ҡайтып китә.

Икенсе бер кистә егеттәр тағы йыйылышып, һөйләшеп ултыралар. Ауыл осонан үҙҙәренә ҡарай бер һарыҡ килгәнен күрәләр. Һарыҡ, әкрен генә атлап, егеттәр менән тинләшкәс, араларынан береһе тегене "бәрә-бәрә" тип саҡыра. Шунда уҡ һарыҡ егет эргәһенә килеп, уға ышҡынып, иркәләнә башлай.

- Юҡ-бар менән булашаһың, ошо ваҡытта кемдең һарығы бикһеҙ йөрөһөн, ул берәй төргә ен, йә булмаһа бисуралыр әле, - ти егеттәрҙең береһе. Был һүҙгә башҡалар ҙа иғтибар итеп, һарыҡты төрлө яҡлап ентекләп тикшерә башлайҙар. Ҡарай торғас, егеттәрҙең береһе һарыҡтың күҙҙәре кешенекенә оҡшауын һәм уға бик мәғәнәле итеп ҡарауын һиҙеп ҡала. Был эш тиген түгел, тип, һарыҡты арҡан менән ҡойма бағанаһына бәйләп китәләр. Иртәнсәк егеттәрҙең береһе бик иртә тороп килеп ҡарай, ләкин һарыҡ урынында булмай.

Киләһе кис егеттәр тағы йыйылышып, ул-был турала һөйләшеп ултыра торғас, һүҙ кисәге төндә күргән һарыҡҡа килеп ялғана. Уның тураһында һөйләшеп тә бөтмәйҙәр, түбән яҡ остан кисәге һарыҡтың тағы ла үҙҙәренә табан килеүен күрәләр. Шикләнепме, был кисте һарыҡты саҡырмайҙар, ә ул үҙе улар янына килеп, кисә һарыҡты саҡырған егеткә яҡынлап, иркәләнә башлай. Егет был юлы һарыҡтан шикләнеп, уны ситкә этәрә, үҙе икенсе урынға шыла. Ҡалған егеттәр шыпырт ҡына арҡан килтереп, теге доға белгән егеттән "әлхәм" уҡытып бәйләтәләр. Был юлы ла иртә менән килергә һүҙ ҡуйышып таралышалар. Иртәһенә иртә менән был урынға килһәләр, кисәге һарыҡ урынына ҡойма бағанаһына бәйле "бисуралы" ҡатын ултыра, ти.

Йәй көнөнөң йылы кистәрендә егеттәр һаман ошо урынға йыйылышыуын дауам итә. Ҡалған кистәр үткәндәгеләре кеүек мажараһыҙ, шым ғына үтә. Шулай бер кис, ошо урында йыйылыусы егеттәрҙең береһе, ҡалғандарын таң ҡалдырып, үҙенең көн кискә ауышып барғандағы күргән бер мажараһын һөйләй.

Көн кискә ауғас, ул бесән эшләп йөрөгән сабынлыҡтан яңғыҙы ғына ҡайтырға сыға. Сабынлыҡтан сыҡҡан һуҡмаҡ юлға ҡушылғас, ул үҙенән алда кемдеңдер бик ҙур бер йөк күтәреп барыуын күрә. Алда барған кешенең кем булыуын, нимә күтәргәнен белер өсөн егет аҙымдарын тиҙләтә. Күп тә үтмәй, егет уны ҡыуып етә, баҡтиһәң, алда барған кеше теге бисура эйәләгән ҡатын булып сыға. Үҙе бик ҙур утын бәйләме күтәргән. Уның бәйләме ҙур булһа ла, егет ҡатындың уны бик еңел, көсөргәнмәй, эйелмәйенсә генә күтәреп барыуын шәйләп ҡала. Был уны ҡыҙыҡһындыра, егет ҡатынға яҡынараҡ килеп, ентеклерәк ҡараһа, утын бәйләме уның инбашына бер аҙ теймәй бара икән. Күтәрелгән утын ауырлығын ул бөтөнләй тоймай, йөк уның тапҡырында осоп барған кеүек, шуға ла ҡатын бик еңел атлай икән. Утын бәйләме уның тапҡырында нимәгә аҫылып тора икәнен асыҡларға теләп, егет ҡатындың ике яғына ла сығып, тикшереп ҡарай, ләкин шикле бер нәмә лә күрмәй. Шулай байтаҡ атлағас, ҡапыл был ҡатындың бисуралы икәне иҫенә төшөп, егеттең сәстәре үрә тора. Егет ҡатындан ҡурҡмай ҡурҡыуға. Ләкин утынды кем күтәргәне менән ҡыҙыҡһынғаны өсөн уның бисураһы бер-бер хәлгә осратмағайы, тип ҡурҡа. Аҙ булдымы ни ундай хәлдәр. Үткән йыл ғына бер ирҙең юҡ-бар менән ҡыҙыҡһынғаны, дин тураһында телӛнә нәмә һөйләгәне өсөн ауыҙы ҡыйшайғайны. Әле быйыл ғына, шундай юҡ-барҙы күп күргәне өсөн, бер ҡатындың күҙҙәре һуҡырайҙы. Егет, ошо хәлдәрҙе иҫкә төшөрөп, иҫән-һау саҡта таяйым, тип, тиҙ генә бисуралы ҡатын янынан ситкәрәк китә һәм өйҙәренә имен-аман ҡайтып етә.

Раuил АСИҒОЛОВ.
Бөрйән районы.
(Дауамы бар).

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

Иң элек уйҙарығыҙҙы, тәнегеҙҙе һәм хис-тойғоларығыҙҙы тынысландырырға кәрәк. Һеҙ ижади фекерҙәр һәм флюидтар менән тултырыу мөмкин булған бер вакуум булдырырға тырышаһығыҙ. Әгәр өй тaҙалау йәки магазинға барырға кәрәклеге тураһында уйлай башлауығыҙҙы һиҙеп ҡалһағыҙ, шунда уҡ уларҙы туҡтатығыҙ һәм ихтыяр көсөн йыйып, аңығыҙҙы медитацияға ҡайтарығыҙ. Медитация ҡулсаның йүнәлешен үҙгәртергә тырышыуға оҡшаған. Бының өсөн тәүҙә тиҙлекте кәметергә кәрәк. Һуңынан инде уны туҡтатып, икенсе яҡҡа әйләндерәбеҙ йәки борабыҙ. Был процеста төпкә аң һеҙгә ҙур ярҙам күрһәтер. Ул нимәгә, ниндәй маҡсатҡа өлгәшергә ынтылғанығыҙҙы аңлағас, уға өлгәшеү мөмкинлеген биргән билдәле бер схема барлыҡҡа киләсәк. Бары тик яңы ғәҙәтегеҙҙе төпкө аңға программалаштырыуҙы туҡтатмағыҙ һәм тиҙҙән ул автоматик рәүештә, һеҙҙең артыҡ тырышлығығыҙҙан башҡа ла эшләйәсәк. Был ғәмәлдәр моторлы кәмәне тоҡандырыуға оҡшаған. Әгәр ҡасандыр кәмә ҡабыҙып ҡараһағыҙ, беләһегеҙ - бауҙы беренсе тапҡыр тартҡанда кәмә тоҡанмай. Тағы ҡабатлайһығыҙ, тағы... Һәм кәмә моторы эшләй башлай, кәмә урынынан ҡуҙғала. Медитацияла ла шулай уҡ. Был халәтте бер нисә тапҡыр һынап ҡарағандан һуң ғына ул еңелләшә башлаясаҡ.

Медитация өс баҫҡыслы процестан тора.

- Көсөргәнештән арынығыҙ һәм ҡотолоғоҙ.
- Бәйләнеш булдырығыҙ һәм тыңлағыҙ.
- Күҙ алдына килтерегеҙ һәм формалаштырығыҙ.

Түбәндәге ысул ябай ғына формала психологиялағы, диндәге, көнсығыш философияһындағы һәм медициналағы барлыҡ һуңғы асыштарҙы берләштерә.

**Беренсе аҙым - көсөргәнештән арынығыҙ һәм ҡотолоғоҙ.** Мускулдарығыҙ көсөргәнештә булғанда, улар физик һәм аҡыл энергияһын йота. Бындай энергиянан ҡотолоу өсөн башта бөтөн тәнегеҙ менән киҙелегеҙ һәм мускулдарығыҙҙы йомшартығыҙ. Артабан инде ултырығыҫҡа уңайлы итеп ултырып, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Тәрән итеп тын алығыҙ һәм яйлап, тыныс ҡына итеп сығарығыҙ. Тәнегеҙҙең көсөргәнештән арынғанын тойоғоҙ. Тынды сығарғанда көсөргәнештән тәбиғи арыныу бара. Ә хәҙер мускулдарығыҙҙы ҡабат ҡатырығыҙ һәм тағы ла көсөргәнештән арындырығыҙ. Ҡулдарҙан, ҡул суҡтарынан һәм ҡулбаштан башлағыҙ. Артабан арҡа һәм эс мускулдарына күсегеҙ. Ниһайәт, янбаш, балтыр һәм табан мускулдарын көсөргәнештән арындырығыҙ. Тағы бер тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм тәнегеҙҙе көсһөҙләндерегеҙ. Минең өсөн иң яҡшы фраза булып "Котол" тигән һүҙ тора. Бары тик эсегеҙҙән генә "Котол", тип ҡабатлағыҙ. Тағы бер тапҡыр тын алығыҙ һәм был һүҙҙе барлыҡ хафаларығыҙҙан, хәстәрлектәрегеҙҙән, кире уйҙарығыҙҙан ҡотола башлауығыҙҙы, тынысланыуығыҙҙы тойғансы, аңығыҙ аңлы фекерҙәрҙән арынғансы ҡабатлағыҙ. Шул мәлдә асыҡ һәм төпкө андан килгән мәғлүмәтте ҡабул итергә әҙер булырһығыҙ.

Роберт ЭНТОНИ.
(Дауамы бар).



## 31 ОКТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.05 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Таинственная страсть". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).
23.35 "Соломон Волков. Диалоги с Евгением Евтушенко" (12+).
00.50 Ночные новости.
02.30, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Велосипедист на том свете". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Гражданин никто". 1-3-я серии. Детективный сериал (12+).
24.00 "Специальный корреспондент" (12+).
01.00 "Сваты". Сериал (12+).
03.05 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (16+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж".**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 01.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.15 "Бай бакса" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Малый бизнес" (12+).**
**22.00 "Спортбар" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.15 "Опрометчивый". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.) (12+).**
**02.30 Г.Шафиков. "Урал-батыр" (12+).**

## 1 НОЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (12+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.00 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Таинственная страсть". 3-я и 4-я серии (16+).
23.40 "Соломон Волков. Диалоги с Евгением Евтушенко" (12+).
00.45 Ночные новости.
02.30, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Лишний". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Гражданин никто". 4-я и 6-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Команда" с Рамзаном Кадыровым" (12+).
01.05 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
03.05 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (16+).**
**11.00 "Следопыт" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Малый бизнес" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (12+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**18.25 Хоккей. ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Ижсталь" (Ижевск).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Дьявол и Дэниэл Уэбстер". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.30 М.Мусифуллин. "Ночь, как вся жизнь" (12+).**

## 2 НОЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.00 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Таинственная страсть". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Соломон Волков. Диалоги с Евгением Евтушенко" (12+).
00.45 Ночные новости.
02.30, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.00 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Нелюдь". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут" (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Гражданин никто". Сериал (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
03.05 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Следопыт" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**16.45 "Интервью".**
**17.15, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**18.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**19.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**21.00 "Власть отвечает".**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "10 шагов к успеху". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.00 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.00 А.Яхина. "Не ломайте крылья" (12+).**

## 3 НОЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" (16+).
19.50 "Поле чудес". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Таинственная страсть". 7-я и 8-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Группе "Чайф" - 30 лет. Юбилейный концерт.
02.20, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.25 "Модный приговор".
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.20 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Четыре женщины". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина" (12+).
23.15 "Любовь на четырех колесах". Мелодрама (12+).
03.30 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Современник" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Малый бизнес" (12+).**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.45 "Власть отвечает" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**19.15 "Башҡорттар" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Супермозг". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә".**
**02.30 А.Атнабаев. "Близнецы" (12+).**

## 4 НОЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Сталинград". Худ. фильм (16+).
08.00 "Кубанские казаки". Комедия.
10.00 Новости.
10.15, 12.20, 15.20 "Война и мир". Драматический сериал (16+).
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
18.35 "Битва за Севастополь". Военная драма (12+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 "Ленни Кравиц" (12+).
02.20 "Дорога в рай". Драма (16+).
04.30 "Модный приговор".
05.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.30 "Государственная граница". "Мирное лето 21-го года". Сериал (12+).
08.20 "Суета сует". Худ. фильм.
10.05 "Генеральская сноха". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Дневник свекрови". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести".
20.30 "Дневник свекрови". Продолжение сериала (12+).
22.30 "Стена". Приключенческий фильм (12+).
01.55 "Тарас Бульба". Худ. фильм (16+).

### БСТ

**07.00, 21.30 Новости.**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Самые правдивые истории".**
**09.30 "Умырзая". Худ. фильм.**
**10.15, 11.00 "Народы РБ".**
**10.45, 11.30 "Орнамент".**
**11.45 Гала-концерт республиканского детского танцевального конкурса "Байыҡ-2016" (12+).**
**15.45 С.Абузаров. "Необычная история в обычной деревне" (12+).**
**17.45 "Замандаш".**
**18.00 "Йома".**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 Алтын тирма".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Серебряный курай" (12+).**
**20.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 Открытие III Международного фестиваля национального и этнического кино "Серебряный Акбузат" (6+).**
**01.00 "Неадекватные люди". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 5 НОЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Сталинград". Худ. фильм (16+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Игорь Тальков. "Я без тебя, как без кожи" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.20 "На 10 лет моложе" (16+).
14.10 "Голос". Специальный выпуск (12+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
22.40 "МаксимМаксим" (16+).
23.50 "Подмосковные вечера" (16+).
00.45 "Последний бриллиант". Криминальная драма (18+).
02.50 "Совсем не бабник". Худ. фильм (16+).
04.25 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00 "Государственная граница". "Год сорок первый". Сериал (12+).
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Россия. Местное время". "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Семейный альбом. Юрий Стоянов" (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Берега". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Она сбила летчика". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Один на всех!" 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 19.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Леонардо".**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "Сулпылар" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Бай" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 "Замандаш" (12+).**
**17.25 Футбол. РФПЛ. ФК "Уфа" (Уфа) - ФК "Рубин" (Казань).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Колесо времени" (6+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Хочу жилье!" (6+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+)**
**23.45 Закрытие III Международного фестиваля национального и этнического кино "Серебряный Акбузат" (6+).**
**01.15 "Туз". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 6 НОЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50 "Мой ласковый и нежный зверь". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
06.10 "Мой ласковый и нежный зверь". Продолжение фильма (12+).
08.15 "Смешарики. ПИН-код".
08.20 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.45 "Теория заговора" (16+).
13.45 Юбилейный концерт Раймонда Паулса.
16.30 "Лучше всех".
17.50 "Точь-в-точь". Новый сезон (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Клуб веселых и находчивых" (16+).
00.40 "Фарго". Триллер (16+).
02.30 "Опасный Джонни". Комедия (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.40 "Государственная граница". "За порогом победы". Сериал (12+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Мелодия на два голоса". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
17.50 "Удивительные люди" (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Клинтон vs. Трамп. Накануне выборов в США". Док. фильм (12+).
01.00 "Снова один на всех". Худ. фильм.

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Приключения Папируса".**
**08.30 "Йома".**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "Мечты (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (12+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Половецкая мистерия" (12+).**
**18.15 "БСТ - 15 лет!" (6+).**
**19.30 "Это мы!" (6+).**
**20.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Слепой горизонт". Худ. фильм (16+).**
**02.45 "Банкрот, или Свои люди сочтемся " (12+).**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге йәйләп үҫә бара. Әлегә ул бына ниндәй:**

**1. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
**2. М. Аҡмуллаһың шиғырҙар йыйынтығы**
**3. Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
**4. Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
**5. Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
**6. Шәйехзада Бабич "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙар**
**7. Зәйнәб Биишева "Яҡтыға" трилогияһы**
**8. Һәҙиә Дәүләтшина "Айбикә" повесы**
**9. Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"**
**10. Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ" романы**
**11. Мостай Кәрим "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы һәм поэзияһы**
**12. М. Ғафури "Фәҡирлектә үткән тереклек" хикәйәһе**
**13. М. Ғафури "Шағирҙың алтын прииксыһында" повесы**
**14. Ғ. Хәйри "Боролош" романы**
**15. Әхиәр Хәкимов "Өйөрмә" романы**
**16. Ноғман Мусин "Мәңгелек урман"**
**17. Ғәлимов Сәләм "Бала" поэмаһы**
**18. Яныбай Хамматов "Төньяҡ амурҙары"**
**Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназияһы уҡыусыһы Азалия Ниғмәтуллина Дауыт Юлтыйҙың "Ҡан" романын уҡып сығырға тәҡдим итә.**

"Д. Юлтыйҙың "Ҡан" романын мин башҡорт әҙәбиәте дәресендә уҡый башланым. Был китап бик тәрән мәғәнәле, унда Беренсе донъя һуғышының ҡот осҡос ваҡиғалары һүрәтләнә. Юлтыйҙың "Ҡан" романын донъя әҙәбиәте классигы Эрих Мария Ремарктың "Көнбайыш фронтта үҙгәрештәр юҡ" әҫәре менән сағыштырырға мөмкин. Ике әҫәрҙең дә идеялары, төп проблемалары һәм тематикаһы оҡшаған. Романдарҙа һуғышҡа протест белдерелә, авторҙар һуғышты ҡурҡыныс һәм тетрәндергес афәт булараҡ һүрәтләй. Төп геройҙар ҙа власҡа ҡаршы күтәрелә, үҙҙәренең хоҡуҡтарын яҡларға, дөрөҫлөктә табырға тырыша. Юлтый ҙа, Ремарк та был һуғыштың мәғәнәһеҙ икәнен күрһәткән.

"Ҡан" романынан күңелдәрҙе тетрәндергән, бөгөнгә быуын кешеләренә фәһем булырлыҡ бер өҙөк килтерәм: "Окоптың төп нигеҙендә кешеләр - йәғни үлек кәүҙәләр яталар. Еүеш балсыҡ менән бергә туңған күп баштар окоптың эс яғына ҡарап яталар. Уларҙың күҙҙәренә, танауҙарына тупраҡ тулған, ауыҙҙары асыҡ ҡалған. Шул асыҡ ҡалған ауыҙҙарҙа ҡайһы һалдаттарҙың ҡашыҡтары тора. Әгәр ҙә окопҡа аш килһә, шул ҡашыҡ менән ашай ҙа, тағы ла шунда ҡыҫтырып ҡуя. Үлек баштарына баш ҡуйып йоҡлау бик ябай күренеш. Сөнки ҡыш көнө атака һуғыштары булмаһа ла, немец пуляһы, немец бомбаһы, немец снаряды менән һәр көн һалдаттар үлеп торалар. Уларҙы күмеүсе лә, ташыусы ла юҡ. Кәрәкмәгән тиреҫ кеүек, улар һәр кис окоп өҫтөнә ташланалар". Йәшәү өсөн көрәшкән ябай халыҡ шулай ҡорбан була, был окоптарҙа кешелеклек тә юҡ, яҡты хистәргә лә урын ҡалмаған. Бары тик ауылдан килгән Булат, Байғужа һәм Буранбай исемле башҡорт егеттәре генә кешелек сифаттарын нисек тә булһа һаҡлап ҡалырға, һуғыш ауырлыҡтарынан һынып төшмәҫкә тырыша. Дауыт Юлтыйҙың "Ҡан" романы тыныс тормоштоң ҡәҙерен белергә өйрәтә.

БӘЙГЕ! БӘЙГЕ!

# "ОҘОН КӨЙ" САҠЫРА

**9-11 ноябрҙә республикала "Оҙон көй" төбәк-ара башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар конкурсы үткәрелә. Илдең күп кенә төбәктәренән йөҙгә яҡын йырсы Туймазы ҡалаһына йыйыласаҡ.**



Бәйгенең маҡсаты - талантлы йырсыларҙы асыҡлау һәм пропагандалау, халыҡ йырҙарын башҡарыу традицияларын үҫтереү һәм һаҡлау. Күләмле сараны Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Туймазы районы хакимиәте ойоштора.

Туймазыла "Оҙон көй" йыр байрамын үткәреү тәжрибәһенең тарихы бай. Килеһе йылда уға егерме йыл тула. Башҡорт халыҡ йырҙарын яратыусылар тәүге тапҡыр I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарарҙарын, Башҡорт фольклорын өйрәнеү, тергеҙеү һәм үҫтереү буйынса дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә 1997 йылда йыйылғайны. Унда 10 йәштән өлкән 26 йырсы ҡатнашты. Бер йылдан һуң ул зона кимәленә сыҡты, ҡатнашыусыларҙың географияһы Өфө, Туймазы, Октябрьский ҡалаларынан, Туймазы, Благовар, Баҡалы, Бүздәк, Йәрмәкәй, Шаран районларынан, Татарстандың һәм Ырымбур өлкәһенән 55 башҡарыусыны үҙ эсенә алды. 2000 йылда Туймазы ҡалаһы Башҡортостандың һәм Татарстандың 27 ҡала-районынан килгән 72 йырсыны ҡабул итте. 2001 йылда ул төбәк конкурсы статусын алды. 2002 йылда башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың республика конкурсында 123 кеше ҡатнашты. 2005 йылда Туймазыының "Родина" мәҙәниәт һарайы сәхнәһенә 163 ҡатнашыусы сыҡты. 2007 йылда Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуына 450 йыл тулыу уңайынан ойошторолған бәйгелә илдең һигеҙ төбәгенән 170 башҡарыусы, шул иҫәптән республиканың 47 ҡала һәм районлары вәкилдәре ҡатнашты. 2009 йылда ла бәйгеселәр күп булды.

Дөйөм алғанда, 1997 йылдан "Оҙон көй" конкурсында Башҡортостандан, Татарстандан, Ырымбур, Төмән, Силәбе, Ҡурған өлкәләренән, Ханты-Манси автономиялы округынан һәм башҡа төбәктәрҙән дүрт йөҙтән 88 йәшкәсә менгә яҡын башҡарыусы үҙ көсөн һынап ҡараған. Бәйгелә оло йәштәгеләрҙең генә түгел, сәхнәгә тәүге тапҡыр аяҡ баҫҡан йәш йырсыларҙың да сығыш яһауы башҡорт халыҡ йырының яңы һулыш алыуы, үҙ башҡарыусыларын табыуы, халыҡтар араһындағы ысын дуҫлыҡ күперенә әүерелеүе хаҡында һөйләй.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НАМЫҪҺЫҘҘЫҢ...

## йөҙө ҡаптай

Сәсәндең теле уртаҡ, сибәрҙең йөҙө уртаҡ, оҫтаның ҡулы уртаҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ялҡаулыҡ шул тиклем аҡрын хәрәкәт итә - фәҡирлектең ҡыуып еткәнен дә һиҙмәй ҡала ул.

**(Бенджамин Франклин).**

Кем сәләмәт, уның өмөтө бар, ә кемдең өмөтө бар, уның барыһы ла бар.

**(Ғәрәп мәҡәле).**

Бәләгә упҡынға оҫҡандағы һымаҡ ҡапыл осрайҙар, ә енәйәткә... баҫҡыслап-баҫҡыслап киләләр.

**(Александр Бестужев).**

Дошмандар бер-берененһ белмәй генә, белһәләр, дуҫлашырҙар ине. Кешеләр бит башлыса нахаҡ яла яғыуҙар һөҙөмтәһендә дошманлаша, ә яла яғыу - ул иң үткер ағыу.

**(Фаддей Булгарин).**

Атом быуатында кешеләрҙе әйберәр түгел, ә ул әйберҙәрҙең төҙөлөшө борсой.

**(Иосиф Бродский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Юлсы бер ауылдан икенсеһенә китеп бара, ти. Ярты юлды үткәс, бер аҙ ял итеп алырға була. Бәхетенә, юл ситендәге матур яланда ботаҡтарын киң йәйеп, манго ағасы үҫеп ултыра. Юлсы ошо ағасҡа һөйәлеп ултыра ла, юғарыға ҡарап, ағас ботаҡтарын, япраҡтарын, емештәрен күҙҙән үткәреп, уйға ҡала: "Ҡайһылай матур ботаҡтар! Ә емештәре һуң, емештәре! Эйе, уларҙы бар итеүсе ахмаҡ түгел..." Хәҙер инде юлсы һуҙылып төшөп ята ла, ағас төҙөлөшөн тағы күҙҙән үткәрә: "Ә шулай ҙа был ағасты бар итеүҙе миңә ҡушһалар, мин башҡа төрлө эшләр инем. Шундай ҙур ағас, ә емештәре бәләкәй генә. Алма саҡлы ғына. Эйе, һиҙелеп тора, был ағасты булдырыусы нимәнелер уйлап еткермәгән. Быны пальманы алайыҡ: үҙе манго ағасынан бәләкәйерәк, ә емештәре ҙурыраҡ. Ҡабаҡты алайыҡ: үҙе өй саҡлым, ә һабағы нәҙек кенә. Ни тиһәң дә, барлыҡҡа килтереүсе улай уҡ аҡыллы түгел, ахры..." Шундай һығымтаға килә юлсы. Тәбиғәттән ниндәйҙер етешһеҙлек табыуына ҡәнәғәтләнеп ята торғас, йоҡлап та китә.**

**Бер саҡ юлсының башына нимәлер килеп төшә һәм ул ҡурҡып уянып, урынынан ырғып тора. Тирә-яғын байҡап, үҙен ҡурҡытыусыны эҙләй. Әммә ул ятҡан урында манго емешенән башҡа бер нәмә лә булмай. Юлсы, ауыртҡан ерен тырнап, манго емешен ҡулына ала һәм уға рәхмәтле ҡиәфәт менән ҡарап тора: "Әлдә генә манго шундай бәләкәй булған. Ҙурыраҡ булһа, ошонда тәбиғәткә һоҡланып ултыра ла алмаҫ инем! Юҡ, ни тиһәң дә, тәбиғәт үҙ эшен белә икән!" - тигән һығымтаға килә ул".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 28 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4900
Заказ - 2000/10